**Салауат Юлаевтың тыуыуына 250 йыл тулыуға ҡарата**

АҪЫЛҒУЖА БАҺУМАНОВ




*Б.Хәйбуллин һүрәттәре*

**9***

Йылҡы итенә ғарҡ туйып, йәшәнлектән аҡҡан шишмәлә һыуһын ҡандырып, ҡорораҡ урын һайлап, һуҙылышып ятты ҡасҡындар. Кисә итте өтөп-мөтөп кенә ҡапҡылағайнылар, бына бөгөн уларға алама ғына булһа ла ҡаҙан ишараты килтереп китте Әминә, кескәй генә төйөнсәктә тоҙ ҙа ҡалдырҙы. Ире ҡайтмаған икән әле. «Ҡасып китмәҫһегеҙме, көтөрһөгөҙмө?» — тип ныҡышты ҡатын. «Ирең беҙҙе тоттормаҫмы? Ҡасҡындарҙы завод хужаларына тотоп биргән өсөн әжере лә бар бит», — тип төпсөндө былар. «Беҙгә һеҙ ул әжерҙәрҙән ҡиммәтерәк», — тип ебәрҙе Әминә. Шулай килештеләр ҙә ҡуйҙылар.

Эңерләгәйне инде. Ҡоштарҙың ярһыулы ярышы баҫылған шөйлә, кәкүктәр генә йә теге, йә был яҡта һаман моңлана. Шишмәнең талғын селтерәүе йәнде рәхәтләндерә, тәнде ойота.

— Башҡортса исемеңде кем тинең әле? — тип ялҡау ғына һораны Андрей Леонтийҙан.

— Хәтереңә төкөрәйем! Яҡшымбәт тинем дә!

— Яҡшы кешеһең дә ул былай...

— Ә тегеләй? — Леонтий, теш соҡоуынан туҡтап, уға бородо ла маңлайына шапылдата һуҡты, үҙе үлтергән серәкәйгә ҡыҙыҡһынып ҡараны. Андрей яуап ҡайтармағас, һорауын ҡабатланы: — Ну, нимәһе тегеләй?

— Бик асылып бармайһың... — Андрей ҡорһағын ыуыштырҙы ла ҡапыл тороп ултырҙы, ситкә «серт» төкөрөп ҡуйҙы. — Кисә мин һиңә оҙон көн буйы үҙем хаҡында һөйләнем, ә һин...

— Ләпелдәк булғасың...

— Бына һин, давай, үҙең тураһында һөйлә!

— Ну, башҡортмон, һинең кеүек урыҫ түгелмен. Әйттем дә!

— Миңә тимәгәйе шайтан бул! Артабан!

Иптәшенең ҡәтғилеге оҡшаны, шикелле, Леонтийға, тыныбыраҡ ултырҙы ла тағатты хәбәр йомғағын:

— Атайымды карателдәр аҫҡас, әсәйем менән мине Бөрө воеводаһы кәнсәләрендәге бер имәнес әҙәм үҙенә алды. Ҡоллоҡҡа инде. Шунда суҡындырҙылар. Яҡшымбәттән Леонтий Моисеев булып киттем. Әсәйемде теге канцелярист йәриә итеп тотҡан, бик ыҙалатҡан. Ахырҙа әсәйем, түҙмәй, хәлде быны ҡатынына тишкән... Ғауғанан һуң әсәйем зым-зыя юҡ булды — һөйләүҙәренсә, мәкегә тыҡҡандар. Ағиҙелдә. Күп тә тормай канцелярист Зиновты ла быуылған килеш таптылар...

Көтмәгәндә Леонтийҙың тамағына төйөр ултырҙы, шуны йә төкөрә, йә йота алмай аҙапланды... Үтте, буғай.

— Ҡапылда тол ҡалған бисә мине Ҡазан драгун полкы прапорщигы Никита Копытовҡа һатты ла ебәрҙе. Теп-теүәл 11 һумға.

— Елленән генә бер ат хаҡы булған икән... Шунан?

— Никита миңә ҡурҡыбыраҡ ҡарай ине. Былай бик туҡмап та барманы, аяҡтан йығылғансы эш-



---

*Аҙағы. Башы 6-сы һанда.

ләтмәне лә, мыҫҡыл итмәне, тик бер алама яғы булды — кәрткә хиреслеге. Отторҙо мине тәки! Яңы хужам иһә тотто ла шундуҡ мине Соҡсон заводына һатты.

Леонтий тынып ҡалды. Бер килке һүҙһеҙ яттылар. Ҡараңғы төштө лә, күктә йондоҙҙар берәм-һәрәм ҡабына башланы. Төн йылы булмаҡсы. Ҡайҙалыр ниндәйҙер ҡошсоҡ йоҡо аралаш һаташыпмылыр сиҡылданы. Алыҫта-алыҫта өкө ухылданы.

— Нисә тапҡыр ҡастың?

Андрейҙың һорауын аңғарманы, шикелле, Леонтий, йөҙтүбән әйләнеп, ҡулдарын ҡаушарып ятты ла:

— Ә? — тине. Шунан һорау башына барып еткәнен аңғартып, әңгәмәһен дауам итте: — Быныһы өсөнсөһө.

— Ҡасып ҡайҙа бармаҡ инең?

— Тыуған яҡтарға тигәйнем дә…

— Иҫәр! Тәүҙә кеше кире яҡҡа ҡаса. Һинең башҡорт икәнеңде заводта белмәгәндәр тиһеңме? Артыңдан шул башҡорттар яғына ҡыуғын сығарғандарҙыр әле, эйеме?

— Эйе. Бик тиҙ тоттолар икеһендә лә. Был юлайы сыуаштар яғына һыпырттым да, сыуаш күскенселәренә ҡушылып, былар ҡиәфәтендә Лабау йылғаһынаса килеп еттем. Шунда айырылыштым.

— Тотторманылармы, әй?

— Юҡ. Рәхмәт төшһөн инде уларға!

— Ана шул сыуаштар инде, имеш, беҙҙең шикелле йәшеренеп йөрөгән Петр батша хәҙрәттәрен, алтмыш бишенсе йылдамы шул, тотторғандар тигән хәбәр сығып ҡалғайны… — Андрей ятҡан урынын яйлап маташты.

— Буш хәбәр! — тип ҡырт киҫте Леонтий. — Ул Петр Федоровичты нисәмә тапҡыр тоттолар инде! Йөрөй әле һаман иректә!

— Эйе шул, — тип ризалашты Андрей. — Уның тураһында иң тәүҙә баяғы Рычковтың Спасское ауылында ишеткәйнем. Яйыҡ казактары араһында йөрөгән, имеш. Хатта Өфө тирәһендә лә күренеп киткән, тиҙәр. Бер ауылда сиркәүҙә уның һаулығына молебен да үткәргәндәр.

— Булыр-булыр.

— Ғибәҙәт тә ҡылғандар икән.

— Уныһын да ишеткәйнем. Батшаны аҙаҡ Демидовтың Ҡыштым заводы тирәһендә күргәндәр.

— Шулай ил ҡыҙырып, халыҡ тормошо менән танышып йөрөй тип һөйләйҙәр батшаны. Беҙҙең заводта былтырҙары ҡырҙан килеп эшләп киткәндәрҙән берәү Дон казагынан ишеткәнен әйткәйне: Петр Федорович хохолдар араһына ла барып сыҡҡан, шунан Воронеж тирәһендә пәйҙә булған… — Андрей күрһөнөңкөрәгән тауыш сығарып йомғаҡланы: — Хәҙер ҡайҙарҙа икән ул?

— Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа ишетелмәй шул, — тип йөпләне уны Леонтий, әҙерәк тымып торғас, үҙенсә һығымта яһаны: — Бәлки, сит илдәргә сығып киткәндер тағы… Бисәһе үҙен үлтерергә ҡушҡас, һалдаттарҙан берәүҙең ярҙамы менән тәүҙә сит илгә ҡасҡан даһа ул…

Ҡайҙалыр нимәләр ҡыштырланы, нәҙек сертләп, ботаҡ-маҙар ҙа һынды, шикелле. Ҡаҫҡындар өнһөҙ ятты, ҡараңғылыҡҡа һағайып ҡолаҡ һалды, тик ҡабаттан ят тауыш сыҡманы. Йылы төн һил. Ай ҡалҡырға иртәрәк, йондоҙҙар ғына күңелле күҙ ҡыҫа.

— Ярай, йоҡлайыҡ, — тине Андрей, уңайлабыраҡ ятты. — Иртәгә лә көн бар, Алла бирһә.

Бер аҙҙан Андрей еңелсә ғырылдай ҙа башланы. Леонтийҙың күҙенә йоҡо эленмәй әле. Уны тағы нимәләр һағайтты. Япраҡтар үҙ-ара шыбырлаштымы, кемдер яҡындан һөйрәлеп-шыуышып үттеме — аңламаҫһың. Хәйер, йәй бит, йәйге урманда тормош ығы-зығыһы төндә лә туҡтамай инде ул…

Үҙ өҫтөнә ырғыған ҡараҫҡының әҙәм затынан икәненә һис тә шикләнмәне Леонтий, шуға бик ҡурҡманы ла. Андрей, ана, йоҡо аралаш хәүефле ҡысҡырып ебәрҙе, урыҫсалап бик ҡаты һүгенде. Ике ҡаҫҡынға ла көрмәкләшер-ойпалашыр

сара ҡалдырылмағайны. Үҙҙәрен бәйләп ташлаған дүрт әҙәмдең йөҙҙәрен сырамытырлыҡ түгел, әммә ҡыланыштарынан башҡорттар икәнлеген аңғарырлыҡ.

— Нишләйһегеҙ? Беҙ угрылар-фәлән түгел, — тине Леонтий сабыр, тыныс тауыш менән.

— Ниндәй зыян ҡылдыҡ һеҙгә? Сисегеҙ! — тип туҙынды Андрей. — Вот разбойники!

Бының яңағына ҡундырып алдылар, шунда ғына ҡасҡын хәлдең етдилегенә төшөндө лә тымды. Икеһен дә аяҡҡа баҫтырҙылар, эткесләй-төрткөсләй ҡайҙалыр алып киттеләр. Бер аҙ тыш-быш килеп барғандан һуң, йәнә һүҙ ҡатырға йөрьәт итте Леонтий:

— Егеттәр, мин илемә — Ирәндек яҡтарына ҡайтып барам...

— Мин дә, мин дә, — тип ҡысылырға ашыҡты Андрей.

Быға са ләм-мим тауыш бирмәгән дүртәүҙең береһе түҙмәне, тамаҡ төбө менән екерҙе:

— Шымығыҙ, эттәр! Юғиһә, батшағыҙҙы ғына түгел, ата-әсәгеҙҙе лә танытам хәҙер!

« Эш хөрт! Тотолған ҡасҡындар өсөн былар бүләк аҡса там итә икән... Их, ҡорһаҡты ит менән тултырып, һиҙгерлекте юғалтҡанбыҙ шул, — тип әсенде эстән Леонтий. — Йә, төндә килеп баҫырҙарын кем уйлаған?»

Ай ҡалҡты. Асыҡлыҡҡа килеп сыҡтылар. Ҡасҡындарҙы тотҡан әлеге дүртәү аттарын ошонда ҡалдырған икән. Менгеләрҙең алтау икәнлеген күреп, ике ҡасҡын барыһын да аңланы. Леонтий быларҙың алдына һуңғы ташты ташлап ҡарарға булды:

— Егеттәр, беҙ — бер йыныс кешеләре бит. Әйҙә, хужағыҙ менән аңлашайыҡ әүәл...

Андрей көтмәгәндә бик аҡыллы тәҡдим индерҙе:

— Ҡарағыҙ әле, һеҙҙә аҙна-ун көн эшләп, беҙгә тейеш хаҡты икеләтә-өсләтә ҡайтарайыҡ, э?

— Беҙ тимер эшенә шәпбеҙ, — тип өҫтәне Леонтий.

Ыжламаны ла былар. Еңелсә юрттырып, алып киттеләр ҡасҡындарҙы. Улар артынан Ай ғына моңһоу ҡарап ҡалды.

## 10

Петр Федорович батшаның Рәсәйҙән ситтә йөрөгәнлеген бик дөрөҫ күҙаллаған Леонтий. Уралдан алыҫ-алыҫта, көнбайышта, Урал-дың үҙе кеүек мәғрур үә олпат Балҡан тауҙары араһында Әҙриә диңгеҙенә терәлеп ятҡан кескәй генә Черногория тигән илдә йөрөй ул. Кем бит әле! Ҡасҡын батша түгел, бәлки ошбу мәмләкәттең хакимы! Ус аяһындай ғына булһа ла мәмләкәт — уға бына өсөнсө йыл инде Петр Өсөнсө идара итә. Ошо тарафҡа әллә ҡайҙарҙан 1766 йылда килеп сыҡҡайны, Маина ауылын үҙ итеп, хеҙмәтселеккә ялланғайны, исем-атын Стефан Малый тип белдергәйне. Ҡаҡса кәүҙәле, уртаса буйлы, утыҙ йәштәр тирәһендәге был ирҙең — сәйер тотошонанмы, сәйер һөйләшеүенәнме — бигүк ябай кеше булмауын күрҙеләр тәүҙә. Шунан әҙәм затын дауалауға маһирлығын белделәр. Иң ғәжәпләндергәне — әлеге шөғөлө өсөн хаҡ-маҙар алмауы. Хәйер, кеше һауыҡ-ҡас үҙе ни бирә — шуны ҡабул ҡыла былай... Тора-бара тағы бер нәмәгә һуштары китте Маина халҡының: Стефан Малый урыҫтарҙың тәхеттән ҡолатылған батшаһына — Петр Федоровичҡа хәтәр оҡшаш таһа! Быны Черногориянан Рәсәйҙә хеҙмәттә йөрөп ҡайтҡандар күп тәкрарланы. Етмәһә, Венециянан бер полковник туғандарын күрергә ҡайтып киткәйне, Стефан менән бик оҙаҡ әңгәмәләшкәйне, ул да дөрөҫләне Маина ауылы ялсыһының Петр батшаға оҡшашлығын.

Бер ваҡыт, 1767 йылдың октябрендә, Цегличи ауылында ҙур ғына йыйын уҙғарҙылар. Ысын урыҫ императоры Петр Федоровичтың ни ғилләнән табылған ысын һүрәтен ғәм халыҡҡа күрһәттеләр. Янына Стефанды килтереп ҡуйҙылар. «Ах!» итте көллөһө лә — һуйған да ҡаплаған бит! Күп тә үтмәне, ил үҙеге һаналған Цетинья ҡасабаһына ете

меңдән ашыу ир-ат йыйылды — Стефанды һүрәт менән йәнә йәнәш ҡуйып ҡаранылар, йәнә «ах!» иттеләр ҙә урыҫ батшаһының Черногорияға ла государь булыуын үтенделәр...

Ана тора ул, ике ил хакимы, ҡаялы-ташлы ҡалҡыу урында. Эргәһендә — ярандары, һаҡсылары. Саҡ ҡына түбәндәрәк, саҡырым самаһы алыҫлыҡта, йөҙләп ир-ат юл һалыу менән мәшғүл: эре-торо таштарҙы соҡоп сығаралар ҙа ситкә, тарлауыҡ яғына, тәгәрләтеп теҙәләр, ыуағыраҡтарын онтап түшәйҙәр, өҫтөнә ҡомлораҡ тупраҡ һибеп төйәләр. Арыраҡ текә үрҙе һөҙәгәйтеп маташалар. Кәйлә-сүкештәр саҡ-соҡ килә, арбалар шығырлаша, кешеләр үҙ-ара ҡысҡырыша. Аяғын имгәткән ирҙе буш арбаға күтәреп һалдылар ҙа ҡайҙалыр алып киттеләр...

Әлеге юл дүрт-биш ауылды үҙәк менән тураға тоташтырасаҡ, быға са ул һуҡмаҡ ҡына, ылаулы ғәскәр үткәрерлек түгел ине. Шуға ла киңәйтәләр, нығыталар. Яҡшы юлдарҙың бик кәрәклегенә ике йыл әүәл, көҙгөһөн, Черногорияны Әҙриә диңгеҙе яғынан Венеция республикаһы, ә көнсығыштан Төркиә солтанлығы ҡулсаға алғас, Стефан Малый халыҡты ышандырҙы. Ышанмаҫтар ине лә — төрөктәрҙән ҡаты туҡмалдылар, иҫән ҡалғандар тырым-тырағай саҡ ҡасып ҡотолдо, хатта батша үҙе әсирлеккә төшә яҙҙы. Уларға ярҙамға килергә тейеш ике меңлек ғәскәр тап бына ошо юлды үтә алмайынса аҙапланған икән... Хәҙер ике йәй рәттән көндәрҙең арыу торғанында тотош илдә йәшерен юлдар һалалар, яҙғы-көҙгө әҙәм үтә алмаҫлыҡтарын рәтләйҙәр. «Яҡшы юлдар дошманға ла кәрәк буласаҡ бит», — тиеүселәр ана шул 1768 йылдың октябрендәге хурлыҡлы еңелеүҙән һуң телдәрен тешләне. Еңелһәләр ҙә, шөкөр, ике йыл тыныс йәшәй әле Ҡаратау халҡы, сөнки Төркиә менән Рәсәй көтмәгәндә үҙара һуғыш асты, ә Венеция улар араһында бутала башланы...

Эш барышын күҙәтеп торған батша янына һаҡсылар оло йәштәге монахты үткәрҙе. Уның Рәсәйҙә оҙаҡ ваҡыт йөрөп ҡайтҡан Елисей икәнлеген Стефан белә ине, саҡыртҡайны.

— Государь, — тип монах баш эйҙе, суҡынып, тегенең ни әйтерен көттө, үҙе Петр Федорович тип йөрөтөлгән әҙәмде аҫтыртын күҙәтте — тәүге күрә бит, ләкин йөҙөнә-ҡарашына ҡыҙыҡһыныу билдәләре сығарманы һис. Сәләмде ҡабул иткән батша ла өндәшмәйерәк ҡалды, бәғзеләргә урыҡ-һурыҡ әмер бирҙе.

«Немецтарҙыҡына оҡшатып кейенгән, ысын Петр ҙа шулай кейенергә яратҡан бит, — тип уйланы монах. — Башында — ҡыҙыл буҫтауҙан кәпәс — скуфья. Быны менән динебеҙҙе хөрмәтләүен күрһәтәлер инде. Йөҙө оҙонсараҡ, маңлайы киң генә, күҙҙәре ялтырауыҡ, сөм ҡара ҡаштары дуғаланып тора, танауы оҙонса, мыйығы һәленке, ауыҙы бәләкәй, аҫҡы ирене бүлтек... Юҡ, был әҙәм немец затынан да, урыҫ затынан да түгел, үҙебеҙҙең серб йәки хорват!» — тип ҡәтғи һығымта яһаны Елисей.

— Йә, тикшереп бөттөңмө? — тип көләмһерәне Петр Өсөнсө. Үҙен тәү күргәндәрҙең һынаулы ҡараштарына күптән күнеккән ул, шуға ла беренсе осрашҡанда тикшерергә мөмкинлек бирә. Әле монахтың баҙабыраҡ ҡалғанын күргәс, Елисейҙы уңайһыҙ хәлдән сығарырға ашыҡты: — Петровец ауылында балалар уҡытырға тейеш икәнлегенде белеп килдеңме?

— Эйе, государь, әйттеләр, — тип тағы баш эйҙе монах, тағы суҡынып алды, батшаның артабан ниндәй әңгәмә алып китерен көткәндә эстән уй йөрөтә һалды: «Бынауҙар алдында урыҫса һөйләшә бит әле... Тауышы бисәләрҙекеке кеүек шул ысынлап та...»

— Аптырама. Тауышым тамағыма һыуыҡ тейгәндән үҙгәрҙе, — тип йәнә көләмһерәне Стефан. — Рәсәйҙән ни хәбәрҙәр тейәп ҡайттың?

«Әллә күрәҙәә инде? — Ҡурҡыбыраҡ ҡуйҙы монах, ләкин быны белгертмәне. — Барыбер урыҫ та, не-

мец та түгел был әҙәм», — тип йәнә үҙ һығымтаһын нығытты Елисей, шунан батшаның һорауына яуап бирҙе: — Хәбәрҙәр күп инде ул, государь...

— Әләйгәс, кис Петровецта әңгәмәләшербеҙ, хәҙер шунда бергә китербеҙ. — Батша, хәҙергә һинең менән эш тамам тигәндәй, ярандарының береһенә боролдо ла бойорҙо: — Рәсәйҙәге вәкилебеҙгә тиҙ үк хәбәр ебәрегеҙ: тәүге урыҫ мәктәбен астыҡ...

— Уҡыта башлаһас, государь, хәбәр итер инек әле, — тип һүҙ ҡыҫтырырға йөрьәт итте монах.

— Депеша барып еткәнсе асҡан булырбыҙ!

«Өтөп алып бара икән был!» — тип һөҙөмтә яһаны Елисей.

Бындағы юл эштәренә идара иткән түрәгә бер нисә күрһәтмә биргәс, Стефан ҡуҙғалырға бойорҙо. Һыбайланып та өлгөрмәнеләр — түбәндәге кешеләрҙең һәммәһе бер ыңғайҙан тиерлек баш ҡалҡытты, бил турайтты, нимәлер һөрәнләнеләр, ҡул болғанылар. Батшаны шулай оҙатып ҡалдылар ҙа тағы тотондолар мәшәҡәтле, ауыр шөғөлдәренә.

Хәтһеҙ ваҡыт ҡағыла-һуғыла барғас, киң генә ике юл сатына килеп етте утыҙлап һыбайлынан торған төркөм. Стефан, уң ҡулын күтәреп, туҡтарға ишара яһаны. Менгеһенән яйлап төштө лә теҙгенен һаҡсыларҙың береһенә тотторҙо, ял урынына бот төптәрен ыуаыуа китте, артынан һаҡ башлығы ғына эйәрҙе. Петр Өсөнсө боролоп ҡараны ла монахты саҡырҙы. Гөрөлдәүек шишмә янына килделәр. Батша кеше ҙур бер йәйпәк таш өҫтөнә етеҙ ҡарашын ташланы ла ҡул сайҡарға иңкәйҙе. Һаҡ башлығы ла ташҡа күҙ төшөрҙө. Елисей ҙа, аптырап, шунда ҡараны: унда, уртаға яҡынығраҡ уйымлы урында, өс тәңкә балҡып ята, алтын, унар һумлыҡтар! Бынагайыш! Кем һалған? Ниңә? Ҙур ғына байлыҡ таһа!

Аҡсаларға бүтәнсә күҙ һалманы Стефан менән һаҡ башлығы. Күн моҡсайҙан сығарылған көлсәне сырға ҡушып ашаштырып алдылар, монахҡа шарап та тәҡдим иттеләр, шишмәнән услап-услап һыуһын ҡандырҙылар, шунан үҙҙәрен көткән төркөм янына тәпәйләнеләр. Елисей артына боролоп ҡарай-ҡарай туңҡанланы. Атына менгәс тә әле йәйпәк таш яғына ҡараш һирпеп ҡуйҙы.

Серҙе һаҡ башлығы Петровецта ат бәйләгәндә систе монахҡа. Баҡтиһәң, алтын тәңкәләрҙе батша ай самаһы элек үҙ ҡулдары менән һалып ҡалдырған имеш. Баяғы оло юлдар сатында Черногорияның төрлө тарафтарынан йәй буйы кеше аяғы өҙөлмәй, һәр кем шишмә янында хәл алып китә, төнгә ҡалып ҡунғандары ла бар. Аҡса һалып, Стефан халыҡтың намыҫын һынай имеш. Уғрылыҡҡа ҡаршы шундайын сәйер сара, имеш.

«Хәйләкәр, һай-һай, хәйләкәр был Малый тигәндәре! — Елисей үҙ алдына көлөмһөрәп баш сайҡаны. — Ул алтын тәңкәләрҙе урлап та беҙҙең илдә файҙаланыу мөмкинме һуң, йә? Бигерәк тә әле тышҡы донъя менән бәйләнештәр тамам тиерлек өҙөлөп ҡалғанда, аҡсаны ил үҙәге Цетиньяла ғына тотонорға мөмкин булғанда кем батырсылыҡ итһен? Хәйер, берәйһе үҙләштерһә, хатта оҙаҡҡа йәшереп ҡуйһа, тотоласаҡ барыбер — итәк аҫтынан төтөн ебәреүселәр тауҙарҙа ла етерлек... Юҡ, ябай заттан түгел был Стефан!»

Ауылда әҙерәк ип-һап иткәс, тар майҙанға йыйылған халыҡ алдына сығып, үҙенә әҙерләнгән ҡалҡыуыраҡ урынға барып ултырҙы Петр Өсөнсө. Баш эйеп хөрмәтләнеләр батшаны. Стефан да, ултырырҙан элек уң усын йөрәгенә баҫып, баш эйеп сәләмләне халыҡты. Түҙеп торғоһоҙ тынлыҡ урынлашты, ул оҙаҡҡараҡ һуҙылырҙай тойолдо, ләкин ил хакимы, йөҙөнә мөмкин тиклем уҫаллыҡ билдәләре яғырға тырышып, күҙҙәрен зәһәр ялтыратты, аҫҡы иренен нығыраҡ бүлтәйтте, шунан эйәген һиҙелер-һиҙелмәҫ ҡаҡты. Ике һаҡсы ҡулдары артҡа шаҡарып бәйләнгән йәш ирҙе кил-

тереп бының ҡаршыһына йөгөнөкләндерҙе. Майҙан бер тулҡынланып ҡуйҙы. Петр Өсөнсөнөң уң яғынан урын алған ауыл аҡһаҡалдары бер-береһенә ҡараш һирпте лә, ҡырыҫ йөҙҙәренә аҡыл саҡҡылары ҡундырырға ниәтләп, ирен ҡымтыны, баштарын эйә төштө.

— Мы, Стефан Малый — с малыми мал, с добрыми добр, — тип, хәбәрен ғәҙәттәгесә урыҫсанан башланы батша. Бисә-сәсәнеке кеүек тауышы майҙандағы бәғзе әҙәмдәр йөҙөндә мыҫҡыллы йылмайыу уятһа ла, ыжламаны. — Беләһегеҙ: ике йыл әүәл йәйгеһен беҙ һәммә халайыҡтарыбыҙға ил аҡһаҡалдарының дөйөм ҡоронда хупланған ҡарарыбыҙҙы еткергәйнек. Унда, һеҙҙәргә мәғлүм ки, кеше әйберен йәки малын урлаған өсөн ҡаты язалар ҡаралған. Ошбу йәһәттән ошоғаса кемдәрҙе хөкөм иткәнебеҙҙе һеҙҙәр белмәй түгел. Эйе! — Петр Өсөнсө тып-тын торған майҙанды күҙҙәре менән һөҙөп сыҡты, ҡымшанманы халыҡ. — Шулай уҡ һеҙҙәргә мәғлүмдер: үҙ туғандарын үҙ-ара низағта үлтергән өсөн ҡайҙа, ҡасан кемдәрҙе дарға аҫырға хөкөм иткәнбеҙ. — Стефан, туҡтап, үҙенә төбәлгән йөҙәрләгән күҙҙәргә йәнә тишә ҡарап алды берауыҡ.

Ялтырауыҡ зәһәр ҡараште майҙан ҡапылда күтәрә алманымы — халыҡ үтәләй дереләүек тулҡындар йүгереште, ләкин тау кешеләре үҙҙәрен ҡулға тиҙ алды, батшаның артабан ни әйтерен көтөп, ҡаялай ҡатты. Арттараҡ торған уҫлаптай бер ир генә мығырҙап ҡуйҙы аяҡ аҫтына: «Күҙең сыҡҡыры!»

Петр Өсөнсө мыйығын һыпырҙы, ниндәй телдә дауам итергә тип сама йөрөткәндәй итте лә урыҫсанан тайшанманы — шулай яҡшыраҡ аңлайҙар бит...

— Если же не послушаете Меня и не будете исполнять всех заповедей, и если презрите Мои постановления, и если душа ваша возгнушается Моими законами... то и Я поступлю с вами так: пошлю на вас ужас... и падете перед врагами вашими, и будут господствовать над вами неприятели ваши...

«Ветхий Завет. Третья книга Моисея. Двадцать шестая глава. — Батшаның әйткәндәрен Елисей ирекһеҙҙән шулай уйынан раҫлап ҡуйҙы. — Ҡара һин уны! Изге Китапты арыу уҡ һупалағанға оҡшай. Дин әһеле түгел микән был Стефан Малый тигәндәре? Скуфья кейеп йөрөүе шунандыр, шәйт...»

— Бынауы әҙәм йораты, — Петр Өсөнсө, ҡалҡынып, һуҡ бармағын тубыҡландырылған иргә тоҫҡаны, — беләһегеҙ: анауы һырт ашаһындағы ауылдан мәртәбәле кешенең берҙән-бер ғәзиз ҡыҙын урлап алып ҡайтҡан. Ҡыҙҙың ризалығынан тыш! Атаһының ризалығынан башҡа! Бисәһе бар өҫтәнә!

Былары ла яҡшы билдәле Петровец халҡына, шуға ла батшаның һүҙҙәренә йөнтәҫ ҡаштарын ҡыбырлатманылар ҙа. Майҙандағыларҙы ниндәй яза бирелере, уның ҡасан башҡарылыры ҡыҙыҡһындыра ине... Ҡаратау илендә ғәҙәттә берәй ҡыҙҙы йәки матурыраҡ күренгән бисә-сәсәне урлап кәләш итһәләр, ваҡиғаны егетлек һанайҙар. Ҡараҡты һатып та бармайҙар, ләкин Черногорияла шулай: көнсығышта сөскөрһәң, көнбайышта шундуҡ ишетелә. Ҡатын-ҡыҙҙы урлау ҡалын ғына ҡалым менән бәйле, уны түләй алмаусылар ҙа күп кенә. Шуға урлашалар. Йыш ҡына ике яҡ та үҙ-ара килешеп тә ҡуя, йыш ҡына үҙ-ара һуйышып та ҡуялар. Донъя бит... Ошо урыҫ батшаһы ил башына ултырғас, тыйыуҙар китте. Быға тиклем ҡыҙ урлағандары өсөн ир-атты аҫтырғаны юҡ ине әле, бына бөгөн...

Майҙандың ғәмһеҙлеген шәйләп, Петр Өсөнсө ауылға баш та, хөкөмдар ҙа һаналған ҡарттар — уң яғындағы аҡһаҡалдар ҡаршыһына ырғып тигәндәй барып баҫты, береһенә бармаҡ тоҫҡаны — йәне нык көйгәйне уның:

— Һинең... әгәр ейәнсәреңде урлаһалар... Төндәрен көсләһәләр, көндөҙҙәрен ҡол шикелле эшләтһәләр, ниндәй хөкөм сығарырһың?

Хөкөмөң билдәле: ҡылысҡа йәбешерһең — ҡон ҡайтарырһың… Аҙаҡ ҡараҡтың туғандары һеҙҙән үс алыр. Гелән шулай ҡырҡышып йәшәргәме?! Ҡасан тәртипкә өйрәнербеҙ? Тәртипһеҙ ил илме инде, йә?!

Петр Өсөнсө кире урынына барып ултырҙы, уйлағандай итте лә тағы ҡалҡты, тауышына ярһыу ҡатыш ҡатылыҡ һалырға тырышты. Уң ҡулын майҙан өҫтөнә йәйеп әйтте:

— Кто украдет человека… или найдется он в руках у него, то должно предать его смерти!

Ни ғәжәп: Стефандың тауышы ысынлап та ирҙәрсә хәтәр яңғыраны, аяуһыҙ ине — шуныһына хайран ҡалды халыҡ. Монах Елисей иһә йәнә эстән уй йөрөттө: «Тағы Тәүрат һүҙҙәрен килтерә — ысын Петр Федорович Изге Китапты шулай аныҡ белеүе мөмкинме? Әлбиттә, юҡ. Дин кешеһе был мотлаҡ», — тип ныҡлы ҡарарға килгәйне генә, ҡапыл тертләп китте, сөнки батша тап бына уның исемен атанысы:

— Смерть Елисею!

Енәйәтсе эргәһендә баҫып торғандарҙың береһе ни арала ҡылысын ҡындан һурғандыр ҙа ни арала һелтәнгәндер — тубыҡландырылған ирҙең башы килеп тә төштө тапап таҡырайтылған ергә. «Тыҡ!» итеп ҡалған тауыш майҙанды үтәләй телеп үтте. Язаға тарттырылған әҙәмгә ғәмәлдә ҙур мәрхәмәт күрһәтелде: бер ни аңғармай ҡалды, «смерть» тигәнде ишетһә ишеткәндер, иллә мәгәр «Елисею» тигәндән ҡолағына барып етеүе икеле. Ул ғынамы! Майҙан халҡы ла һис нәмә абайламаны ҡапылғара. Хөкөмдөң былай һәләк тиҙ барып осланырын көтмәгәйнеләр. Шаңғыулы тынлыҡтан һуң майҙанда дәррәү суҡыныштылар, бер ыңғайҙан уфтаныштылар. Теге арттараҡ торған уҫлаптай ир йәнә аҫҡа ҡарап мығырҙаны: «Һин дә оҙаҡ йәшәй алмаҫһың!» Аяҡтары ҡалтыранған Елисей монах, суҡына-суҡына, енәйәтсенең үҙенә осраҡлы аҙаш булғанына төшөнөп аҙапланғанса, Петр — Стефан, тауышын ҡалынайтырға көсәнеп, бер ни булмағандай, майҙанға тыныс һүҙҙәр ташланы:

— Тирә-яҡтағылар өсөн дә уңайлы урын һанап, ауылығыҙҙа урыҫ мәктәбе асыуҙы һорағайнығыҙ, беҙ быны хуп күрҙек. Беҙ — Рәсәйҙеке! Тимәк, урыҫса ла белемле булыуыбыҙ зарур. Бына һеҙгә мөғәллим. Дин үә урыҫ телен уҡытыр. Аты — Елисей…

Майҙанда еңелсә шау тыуҙы. Батша көлөмһөрәне.

— Енәйәтсе Елисей урынына — изге Елисей! Бәс, күҙ урынына — күҙ, теш урынына — теш!

«Үәт хәйләкәр, үәт мәкерле әҙәм!» — Шулай уйлаһа ла, батшаның ҡаты ҡуллылығы, ныҡлығы, тәүәккәллеге оҡшаны монахҡа.

Стефан Малый янындағыларға һиҙҙермәй генә һаҡ башлығынан бышылдап һораны:

— Кем ине теге… артта мөңгөрләп торғаны?

— Язаланғандың бер туған ағаһы, ә нимә?

— Юҡ, былай ғына һорауым.

— Әһә, аңлашылды!

«Теймәҫкә!» тигәнде батша сәнсә ҡарап төшөндөрҙө, һаҡ башлығы ла ҡарашы менән яуапланы: «Күҙҙолаҡмын. Әмерегеҙҙән тыш ҡыл да ҡыбырлатмам!»

Киске әңгәмәлә Петр Өсөнсө тағы ла нығыраҡ оҡшаны Елисейға. Рәсәйҙә оҙаҡ йылдар йөрөп ҡайтҡас ни, ундағы хәлдәрҙе бәйнәбәйнә бәйән иткәнендә, Стефан эленән-эле һүҙ-һорау ҡыҫтырып ултырҙы. Белеп ҡыҫылды. Екатерина Икенсенең уны — Черногория хакимын — «чучело», йәғни ҡараҫкы, «злодей» тип атағанын әйткәс Елисей (быны монах кеше аша ишеткән, әлбиттә. Һарай әһелдәренә яҡын йөрөгән бит), шарапты һыу һымаҡ һемереүҙән туҡтамаған батша сәйер генә мығырланы: «Жена да убоится мужа своего!» «Был шайтандың Рәсәйҙә ысынлап та берәй көсө-таянысы бармы әллә?» — тигән уй төштө башына мо-

нахтың. Стефан тәхет варисы Павелға күсерҙе әңгәмә юсығын. Үҙе һаман шарап уртлай — тамсы ла исермәйсе.

— Халыҡ араһында Павел Петровичтың атаһы үлгәнлегенә ышанмауы хаҡында хәбәр йөрөй-йөрөүен, — тине хәмерҙән мейеһе томалана башлаған Елисей, — ләкин варис үҙ әсәһенән бик шөрләй. Тәрбиәсе Никита Паниндан ил менән идара итергә хатта ихлас өйрәнә, имеш...

— Булыр бала биләүҙән... — Петр Өсөнсө оҙон ғына итеп кикереп алды, фекерен артабан йәйелдереп торманы, ҡалъя һоғондо ла уймаҡ ауыҙына йәнә көрөшкә терәне.

— Павелды үҙ атаһына оҡшамаған тигән ләстит хәҙер Петербургта берәүҙе лә аптыратмай... — Монах ниңә шулай тигәнен үҙе лә белмәй ҡалды. — «Хәйер, Стефан ысын Петр түгел дә», — тип үҙен эстән йыуатты.

— Баяғы Панин, Катьканы урынынан осороп, Павелды тәхеткә йәһәтерәк мендермәксе тинеңме әле?

Черногория батшаһының ҡарамаҡҡа ырыя ғына бирелгән һорауы Елисейҙың мейеһенән хәмер быуҙарын ҡыуып таратты.

«Господи, әллә ысынлап та Петр Федорович инде был?!» — тип икеләнде монах, шунан әңгәмәсеһенең күҙҙәренә баҡты: ниһайәт, исерҙеме, йәнәһе. — «Юҡ, түгел! Ялтырауыҡ ҡарашы бик мәғәнәле, ниндәйҙер асҡыртын уй менән яна, етмәһә. Нимәләр менән шаңғытырға самалаймы Елисейҙы?..»

Шаңғытты шул! Стефан балсыҡ көршәкте «дыңҡ!» ултыртты ла көтөлмәгән һорау ташланы:

— Ырымбур тарафтарына йәшертен барып ҡайтҡаныңды ниңә һөйләмәйһең? Исергәнемде көтмә!

«Билләһи, күрәҙә был!» — Елисей күҙҙәрен асалаҡ-йомалаҡ ултырҙы бергауым, өнө тығылды. Монахтың былтыр йәй Уралға ике айлыҡ сәйәхәтен Петербургта ла бик-бик һирәктәр белә ине бит, Черногорияға — тауҙар араһында юғалып тигәндәй ятҡан ҡараңғы төбәккә — ҡайҙан килеп еткән хәбәр? Тамам алйыған Елисей эстән һөҙөмтә яһаны: «Ысынлап Петр Өсөнсө был, шайтан алғыр!» — Шайтандың уйҙа ғына ла телгә килеүенән монахтың ҡобараһы осто, йәһәт кенә өс ҡат сүҡынып алды...

Әңгәмәсеһенең әле ниндәй хистәр кисереүе борсомай ине Стефанды, тынғыһыҙлай унаң уйҙарын бөгөнгө яҙаны атҡарыуы. Батшалыҡҡа ултырғас та илдәге иң абруйлы, халыҡҡа йоғонтоһо ныҡ булған ун ике кешенән хөкөм сығарыу Коллегияһы һымаҡ нәмә ойоштоғайны. Быға тәүҙә ҡаршы килеп маташтылар, ләкин көндәләр — Стефандың Рәсәй өлгөһөнә һылтаныуы етте. Ҡаратау халҡы үҙҙәрен Рәсәйҙеке итеп тоя, ғәмәлдә Төркиә ҡулы астында йәшәһә лә илдәрен Рәсәйҙең бер өлөшө булған мәмләкәт тип ҡарай... Ана шул Коллегия хөкөмө менән Черногория батшаһы йылҡы урлаған ике әҙәмде һуйыл менән ярҙыртҡайны — ай, был ысынлап та урыҫ тәртиптәре индерә бит, тиештеләр... Бер ауылда бер туғандар араһында яньял сығып, өлкәне үҙ атаһына ҡуша ҡустыһының да йәнен ҡыйғайны — Коллегия ҡарары менән дарға астылар уны. Батшаның ҡаты ҡулы кемдәргәләр ярамағандыр, иллә мәгәр ҡаршы килә алманылар Коллегия хөкөмөнә... Бөгөн иһә анауы мөртәткә шәхсән үҙе сығарҙы ҡарарҙы — батша хоҡуғын да танытайым тип ҡылды эште. Иртәгә ни тиерҙәр илдә? Яҙаланған Елисейҙың туғаны һөйләгәнсә, уның үҙен дә берәй мәл баҫтырмаҫтармы элмәк астына, ҡуймаҫтармы ҡылыс астына?

Стефан балсыҡ көршәктән көрөшкәһенә шарап ҡойҙо ла хәнйәренең һабы менән өҫтәлде йыш-йыш туҡылдатып алды. Шундуҡ килеп ингән һаҡсыһына монахты үҙ бүлмәһенә алып китергә ым бирҙе лә, көрөшкәһен ауыҙына ҡаплап ҡуйғас, ауырайып торҙо урынынан — уға ла ял-йоҡо кәрәк. Хәйер, үҙе менән йөрөткән һөйәркәнең дә һис юғы бер тапҡыр күңелен күрергә

кәрәк бит йоҡо ҡосағына сумыр алдынан...

Һаҡсының яурынына уң ҡулы менән аҫылынып Елисейҙың аяҡтары буталыңҡырай, теле лә көрмәлә — һөйләнә бит әле үҙе:

— Гос... ы!.. государь! Ырымбур тураһында... йәме? Йәме ир... ир... йәме... тәгә!

### 11

— Әй, мосафир! Уян! Өфө!

Әллә ниндәй шығырлаҡ, ялҡытҡыс көйгә иҫе инәле-сығалы йоҡомһорап килгән Елисейҙың ҡабырғаһына еңелсә төрттөләр.

— Ә, нимә? — Алан-йолан ҡаранды монах. — Өфө? — Күрһәтелгән тарафты саҡ аңғарҙы: — Ә-ә, Өфө-ө...

Арба хужаһы күрән бейәһен шәберәк ҡыумаҡҡа сыбыртҡы күтәрергә иткәйне лә, ат ҡойроҡ ҡалҡытты — оло хәжәтен хәрәкәт ыңғайы башҡарырға кереште.

— Шулай, мосафир, әңгәмәне лә иштек, һин хатта әүен баҙарын да ҡыҙырырға өлгөрҙөң — килеп тә еттек. Иптәш менән юл ырап ҡала ул. На-а, малҡай! Еткән саҡта ат шәберәк тартыусан, ә һин... — Ылаусы сыбыртҡыһын һелтәп ҡуйҙы.

— Спасибо, служивый! Бог тебя возблагодарит.

— В Бога веруем, но и сами не плошаем... Хе-хе...

— Не богохульствуй, сын мой.

Кәмәләр өҫтөнә һалынған таҡта күперҙә үткәнендә Ағиҙелде ҡыҙыҡһынып күҙәтте Елисей. Стәрлетамаҡ пристанендә булғанда ла күргәйне — әлеге тирәлә нисегерәк, йәнәһе. Бында ла киң генә икән, йәйрәп ята, мул һыулы, саф — Волганан таҙараҡ һәр хәлдә. Балыҡтарының ғәләмәт күплеге тураһында әйткәйнеләр, ашаткайнылар ҙа хатта. Ана бит — яр буйынан да, кәмәләрҙән дә ҡармаҡлайҙар. Үрҙәрәк һул ярға һалдар һуғылған — төнгөлөккә күпер асҡанды көтәләрҙер. Аҡсарлаҡтар сыуылдаша... Ҡеүәтле, матур йылға. Кискә ауышҡан көн дә ифрат матур.

Ҡалаға инеүселәр байтаҡ: йәйәүлеләр, һыбайлылар, арбалылары. Ылау хужаһы иртәгә баҙар икәнлеген иҫкәрткәйне. Ана, тейәнгәндәр, күтәренгәндәр. Быларҙан алда барған арбанан өс-дүрт һарыҡтың башы шәйләнә, береһе нишләптер әлдән-әле ҡарлыҡҡан һымағыраҡ тауыш менән көслө бәәлдәй.

Монахтың ҡолағына өҙөк-йыртыҡ хәбәрҙәр салына. Төрлө телдә. Урыҫсаны әйтергә түгел, татарса ла һөйләшә Елисей. Ырымбурҙа уны апаруҡ камиллаштырҙы. Башҡортсаға бына теш үтеңкерәмәй — аңлауын аңлай ҙа. Ырымбур баҙарында ҡаҙаҡтарын да, ҡалмыҡтарын да күрҙе — монголдар шулар икән тип фекер төйнәне. Әле күперҙә сыҡҡанында ишетелгән хәбәр-һүҙ монахҡа бик ҡыҙыҡ та түгел — баҙарға бәйле башлыса.

Елисей ултырған арба хужаһы алда барыусыға аҡырҙы ҡапыл:

— Эй, бусурман! Прими правее!

— Сам... Сам знай!

— Я те дам «сам»!

— Я муклашка дай!

Күпме ҡысҡырышырҙар ине бербереһенә кәзекләшеп — сығып еттеләр. Арлы-бирле тикшереү үткәрҙеләр, күпер әжерен түләнеләр. Елисей арба хужаһы менән иҫәпләшкәндә саҡ ҡына артығыраҡ бирҙе. Быныһы рәхмәт йөҙөнән суҡынып баш эйҙе, һаубуллашып, ҡуҙғалтмаҡтан атының башын ҡапыл шаҡара тартты. Күрән бейә, алаҡанлап, боролор урында ниңәлер артҡа ҡырҡа сигенде лә киҫкен алға ынтылды — арыуы ла еткәндер инде. Бәәлдәгән һарыҡлы арба хужаһы ла ҡуҙғалып тора ине. Әлегеште бит береһенең алғы, икенсеһенең артҡы тәгәрмәстәре!

— Открой глаза, косоглазый бусурман!

— Балушиш ишшеү бусурман! Кафыр!

— Ах ты, башкирская морда!

— Ты — уҫыраҡ урыҫ!

Елисейҙың юлдашы, сыбыртҡыһын бөрә тотоп, атын артҡа сигендереп аҙапланған башҡортҡа ташланды. Ғәйеп үҙендәлеген аңлаһа ла буйсан ҡалын кәүҙәһенә ышанды, шикелле. Ырғып төштө тегеһе лә арба-

һынан, ул да бөрә тотҡан сыбыртҡыһын. Ҡыҫҡа ҡамыт аяҡтарын кирә баҫып, төпөш кәүҙәһенә ғәләмәтле ғәйрәт индереп, ажарланып тора. Баҙаңҡыраны урыҫ, шулай ҙа сыбыртҡыһын кирелеп һелтәне — үреүле оҙон ҡайыш йыландай уралды тегеңә. Шуны ғына көткәндәй, башҡорт та сыбыртҡыһын эшкә ҡушты — ялландыра тартты, осо саҡ ҡалды быныҡ күҙен сығармай...

Ни арала йыйылып киткән халыҡ уҫмаҡ суҡмарҙарын уратып та алған, береһе бер айырырға ынтылмай, һөсләтеүен белә:

— Сал, абыҡай, сал шул урысҡа!

— Да врежь ему как следовает!

— Тондор танауына сусҡаның!

Сыбыртҡылар ергә ташланғайны инде, кәпәстәр ҙә осҡайны. «Ых!» та «ух!» көрмәкләшеү китте. Үҙара нимәлер әйтештеләр, етмәһә. Башҡорт урыҫтың биленән һыға ҡосаҡлап алған да башы менән һөҙә, ә урыҫ башҡорттоң арҡаһын төйгөсләй.

— Ты, медведь косолапый, барсучка не можешь одолеть?!

— Ағай-ағай! Шул бер урыҫты ғына инде... Аяҡ сал да ҡуй!

— Булмас былардан... Үәт үзем бирер идем кирәген!

Былар янына ҡарауыл һалдаттарының береһе йүгереп килде лә йән көскә аҡырҙы:

— А ну прекратить, окаянные! Кончай!

Ҡайҙа тыңлау! Ҡайҙа туҡтау! Уҫмаҡлашыусыларҙы айырырға араларына инде һалдат, әммә үҙенә күберәк эләкте: урыҫы тос йоҙроғон, яңылыштанмылыр, уның елкәһенә төшөрҙө; башҡорто, аңғармаҫтанмылыр, аралаусының танауын төкөп ҡанатты. Өсәү ойпалашҡан урынға тағы бер һалдат — ҡупшы ғына мыйыҡлы ир — осоп килеп етте:

— Бирешмә, ағай! Ана шулай, ана шулай! Ҡатыраҡ бәр!

— Ҡуй, абыҡай, кач син! Әйҙә урыслар үз-ара сугышсын!

— Ну что вы, служивые? Какое вам дело до чужого мордобоя?

Юғарынан урыҫса уҫал ҡысҡырыу яңғыраны ҡапыл:

— Стойте!

Быны ла киҫәүгә алмаҫтар ине — ыңғайына нимәлер сәртелдәне — пистолдән аттылармы әллә? Ҡатынҡыҙ сәрелдәгәне ишетелде. Кемдер «мать»тан һалдырҙы. Тамашаны баштан ҡыҙығып күҙәткән Елисей башын күтәрҙе. Йәш кенә һыбайлы икән, башҡорт. Пистолдән атмаған, ҡамсы сәртелдәткән — йәнә ике ҡат һелтәнде: уҫмаҡлашыуҙан туҡтанылар. Ҡупшы мыйыҡлы һалдат әлеге егеткә түгел, бөтөнләй икенсе яҡта торған өс һыбайлы янына барып баҫты ла, өҙөк-өҙөк тын алып, хәлде аңлата башланы:

— Вот... господин старшина... ни за что... ох!.. поссорились два дурака. Мы, значится, разнять... как полагается попытались было...

Старшина тигәндәре баш ҡына ҡағып ҡуйҙы, йөҙөн сирылтманы ла, исмаһам. Уның ике юлдашы шулай уҡ ым-тым сығарманы.

Елисей быларҙың да башҡорт икәнлеген йөҙ-ҡиәфәтенән, кейемдәренән тиҙ аңғарҙы. Старшина тигәндәренең билендә затлы ҡынлы ҡылыс тағылған, кейеме лә бик затлы. Үҙе ғорур ултыра эйәрендә — ажрай бөркөтмө ни! «Беҙҙең Черногория түрәләренә оҡшағансы...» — тигән ҡыҙыҡ уйға килде монах. Эргә-тирәлә бышылдау китте: «Нуғай даруғаһының баш старшинаһы Әлибай!» «Янындағылары кем икән?» «Ә теге егет кем?»

«Теге егет», менгеһенең муйынын һыйпай-һыйпай, киң түңәрәк йөҙө менән ҡояштай йылмайып, һалдатты урыҫса йөпләне:

— Два дурак, два петух!

Ситтәрәк тапанышып торған, беләктәренә оло тал кәрзин аҫҡан ике йәш мәрйә «пырх!» итеп ҡалды. Йыйылышҡан әҙәмдәр таралаыша башланы. Һалдаттар, пырхылдашҡан ҡатынҡайҙарға күҙ ташлай-ташлай, мундирҙарын ҡаҡҡыларға-рәтләргә кереште. Йәш егет йәнә яңғырауыҡлы таныш бирҙе:

— Әлибай түрә, һауғынамы! — Үҙе өс һыбайлы янына килеп етә һалды. — Ил-көн именлектәме?

Старшина таныманы уны:
— Туҡтале, кем улыһың?
— Шайтан-Күҙәй старшинаһыныҡы.
— Салауатмәле... Ҡайҙан килә ятаң?
— Уҡыуҙан ҡайтып барам.
— Нишләп кисләтеп сыҡтың?
— Көн ни, төн ни — этем буһынмы минә...
— Ярай, әләйгәс. Хәйерле юл! Атаңа сәләм әйт.
Һыбайлылар ҡуҙғалышҡас, баяғы ике ылаусы, араларында бер нәмә булмағандай, арбаларын ипле генә айырып алды. Шунан төпөшө, ирмәк баҫып, буйсандың янына килде лә устарын йәнәшләп һондо:
— Ыздырастуй, ызнакум!
«Әллә таныштар инде?» — тип аптыраны Елисей.
Урыҫ та ҡуш ҡуллап күреште:
— Здравствуй и ты!
Арҡа ҡағып яратыштыларсы. Ғәжәпләнде йәнә Елисей.
— Башли, урыҫ медведь? — тип йылмайҙы башҡорт.
— Поехали, башкурт бурсак, — тип йылмайҙы урыҫы ла.
Бер-береһенә ихлас асыҡ ҡараш ташлай-ташлай, үҙ арбаларына йәтешләнеп ултырҙылар. Урыҫты алдан үткәрмәк ине башҡорт, быныһы, киреһенсә, тегеңә итәғәт күрһәтте. Менеп киттеләр Өфөгә... Ҡатынҡайҙар ҙа ҡуҙғалғайны — уларға һүҙ ҡатып ҡалырға баҙнат итте, ниһайәт, һалдаттарҙың ҡупшы мыйыҡлыһы:
— Эй, красавицы, откель идете?
— Али не признали? — Мәрйәләрҙең йыуантығырағы туҡтай биреңкерәне, яртылаш боролоп, күҙҙәренән осҡондар сәсрәтте: — Зубовские ж мы.
Әхирәте иһә әйләнеп тә ҡарамаһы, кәрзинен икенсе беләгенә күсерҙе, унын өҫтөнә ябылған аҡһыл сепрәкте йүнәткеләп, арт һанын нығыраҡ уйнаҡлатты. Шулай ҙа, барыңҡырағас, оҙон һары толомон уңға елпеп, артҡа ҡараш ташланы барыбер. Йыуантығы әхирәтен ҡыуып етә һалды ла тегенең ҡолағына нимәлер әйтте — пырхылдап көлөштөләр йәнә.
Ҡупшы мыйыҡлы һалдаттың хеҙмәттәше, мин дә ҡоро ҡалмайым әле типме, ҡысҡырған булды:
— Свидимся завтра на базаре, а, девоньки?
«Шылт» та итмәне ҡатынҡайҙар — тиҙҙән боролошта күҙҙән юғалдылар. Һалдаттар ҙа, үҙ-ара нимәгәлер көлөшә-көлөшә, ҡарауыл аласығына табан йүнәлде. Күперҙә хәрәкәт дауам итте.
Арбала оҙаҡ килеп, тәне апаруҡ һыныҡҡанын яңы тойҙо Елисей. Ике тоҡсайлы һәлмәк йөгөн уң яурыны аша ауырлыҡ менән ташланы, шулай ҙа етеҙ ҡуҙғалып китте. Сиркәүгә алыҫ түгеллеген күргәс, аяҡтарына ла эш бирмәгә аттан тороп ҡалғайны ул. Ана, ялтырап күренә көмбәҙе. Тәреһе тапҡырында ғына, бейектә — ҡарағусҡылһоро болот ярпыһы. Күк йөҙө былай асыҡ, тыныс. Йәшелләккә күмелгән ҡала ла һил. Арыуыҡтан бирле ямғыр яумаған. Аяҡ аҫты — саң-туҙан. Танауға, ауыҙға ултыра. «Яуһа, бында лыс батҡаҡ була ла ҡуя икән ер», — тип дөрөҫ һығымтаға килде мосафир.
Арттан яңғыҙ ат тояҡтары тауышы ишетелде. Монах уңғараҡ тайшанып ҡараһа — баяғы йәш башҡорт икән. Һыбайлы Елисейға етәрәк атын аҡрынайтты. «Ниңә кире боролдо икән? Төнгө юлдан шөрләй төштөмө әллә шулай ҙа...» — тигән уй йүгереп үтте монахтың башынан.
— Скажи, поп, какая сторона повернул старшина?
— Кажется, вон туда, налево.
— Спасибо. А ты откуда шагаешь?
— Издалека я... Ох, как издалека.
— Москва? Питербур?
— Еще далече. Балканы.
— Слышал. У нас тоже есть Балкан. Прощай!
— Прощай, Салават!
— Һа, запомнил имя... Тебя как зовут?
— Елисей я.
Тағы бер ҡат һаубуллаштылар. Егет, һулға ҡайырылып, күҙҙән

юғалды. Монахтың уйҙары күпер ауыҙында әле генә булып уҙған ваҡиғаға, ыҙғышты бик үҙенсәлекле туҡтатҡан бынауы мыйығы ла сыҡмаған Салауатҡа әйләнеп ҡайтты:

«Йә, анауы ике ылаусы һымаҡ беҙҙә талашып китһәләрме — ыҙғыш ҡан ҡойошоу менән барып осланыр ине, валлаһи. Былары бер үк милләт кешеләре лә түгел бит әле, етмәһә. Уҫмаҡлашыуҙары һуң! Уҫмаҡлашыумы ни! Уйын һымаҡ ҡына. Ҡайһылайын ҡыҙыҡ ҡына ҡапыл татыулашты ла ҡуйҙыларсы… Илемә ҡайтып һөйләһәм, ышанмаҫтар, вот те крест. Урыҫ һалдаттары менән башҡорт һыбайлылары ҡайһылай ҙа сәйер ҡыландылар. Һалдаттары, ике янъялсыны ҡулға алып бикләр урынға, айырырға кереште, үҙҙәренә туҡмаҡ арыуыҡ төшһә лә… Даруғаның баш старшинаһына ихтирам күрһәтеүҙәрен әйт әле һин! Ғәмәлдә бит уға үҙ биләмәһе башҡорттарынан башҡалар буйһонмаҫҡа тейеш тә. Бигерәк тә һалдаттар… Ҡупшы мыйыҡлы иһә уға ҡаршы йүгереп бара һалды… Салауатсы? Уҡып йөрөй икән. Малай ғына, ә көллө ата балаларын тыңлатырҙай ихтыяры сағыла үҙенең… Хәйер, старшина балаһы бит — өйрәнәләр, үҙе лә бер саҡ старшина булыр, моғайын. Старшиналыҡ бында нәҫелдән-нәҫелгә тапшырыла, шикелле. Ҡыйыу күренә был Салауат тигәндәре. Илгәҙәк, тартыныуһыҙ…

Һай-һай, яраштырырһың беҙҙекеләрҙе былай бик тиҙ! Туған туғанға хаслаша ғүмере буйы. Рәсәйҙә иһә… Хикмәт нимәлә? Төрлө милләттәрҙең хәтһеҙ йылдар йәнәш йәшәүендә-көн итмешендәме? Улай тиһәң, Рәсәйҙең эсендә лә һуғыштар йыш сығып тора, тик милләт милләткә ҡаршы түгел. Беҙ иһә Ҡаратауҙа — бер халыҡ балалары, ғүмер-ғүмер низағтарҙан, ҡан ҡойоштарҙан башыбыҙ сыҡмай… Моғайын, дәүләттең, дәүләт хакимиәтенең ныҡлығындалыр эш, шулайҙыр...»

Бара-бара был һөҙөмтәһенең дә хаҡлығына шикләнә башланы Елисей. Екатерина Икенсене иҫкә төшөрҙө. Дәүләт башына ултырыр өсөн шул ханым мәкерле рәүештә үҙ иренең башына етмәнеме ни?!

«Әйткәндәй, Петр Федорович үлтерелмәгәндер, — тип уйҙар тәртәһен шаҡарҙы Елисей. — Рәсәйҙә күренгеләп ҡала, имеш… Беҙҙең Ҡаратау иленә лә барып сыҡҡаны ысынмы, бушмы? Стефан самозванец түгелдер, бәлки… Ана, Яйыҡ казактары батшаның иҫәнлегенә ышана, хатта ныҡ ышана, ә уның тәхеттәге бисәһен «самозванка», «поганая немка» тип кенә еббәрәләр… Уай-й, ҡатмарлы был донъя! Хикмәттең ниҙәлеген ҡапылғара аңларлыҡмы?! Ҡуй, башҡа ла, тәңгә лә ял кәрәк», — тип Елисей аҙымын ҡыҙыулатты. Ни күрә — баяғы Салауат, уға ҡул болғап, ҡайтыр яғына юртып уҙҙы. «Берәй нәмәһен онотҡан булғандыр», — тип тынысланды монах.

Уның Ҡаратау иленән урыҫ хеҙмәтенә ялланғандар араһында килеп Петербургта йәшәүенә дүртенсе йыл киткәндә һис тә көтөлмәгән тәҡдим яһанылар Елисейға: ваҡытлы конфидент* вазифаһында Ырымбур губернаһына барып ҡайта алмаҫмы? Илгиҙәр монах рәүешендә йөрөп, ҡара халыҡтың тын алышын белеү фарыз, сөнки урындағы конфиденттарҙан, шулай уҡ урындағы хакимиәттәрҙән йыйылған мәғлүмәттәр Сит ил эштәре коллегияһын кәнәғәтләндермәй башлаған: әлегә барыһы ла ал да гөл, имеш. Яңыса ҡараш, ул яҡтарҙа булмаған сит кешенең яңы баһалары талап ителә. Рәсәйҙең Төркиә менән һуғыша башлауы сәбәпле, губернанан байтаҡ ғәскәрҙе Дунай тарафтарына тартырға, рекруттар йыйымы үткәрергә, ҡаҙнаға һалымды арттырырға тура килә. Тимәк, ризаһыҙлыҡ көсәйеүе ихтимал. Иң хәүефлеһе — башҡорттар менән Яйыҡ казактары араһында батшалыҡҡа ҡаршы бола ҡубыуы.

* Конфидент — шымсы, шпион.

Елисейҙың Рәсәй империяһына мөхәббәтле ҡараште тороуы яҡшы билдәле ине коллегияла. Етмәһә, биш-алты тел белә, шул иҫәптән татарсаны ла. Петербургка килгәс, төрөксәнән татарсаға өйрәнеүе ҡыйын булманы уға. Кеше менән аралашыуҙа ла ауырлыҡ кисермәй. Әҙәм балаларын һөйләндерә-тыңлай белә...

— Илегеҙҙә мәрхүм Петр Федорович исеме аҫтында ниндәйҙер Стефан Малый тигән бәндә барлыҡҡа килгән. Рәсәйҙә был оло сер һанала. Һеҙгә ышанылмаймы? — тип һораны Сит ил эштәре коллегияһы хеҙмәткәре.

— Юҡсы...

— Хуп, ә һеҙгә был серҙе бик ышаныслы кеше күреп асабыҙ.

— Черногория халҡына шул Стефандың самозванец икәнлеген рәсми иғлан итһәгеҙ, арыу булмаҫмы? Беҙҙең халыҡ Рәсәй императорҙарының рәсми һүҙенә һәләк ихтирамлы. Урыҫ батшаларын үҙҙәренеке иҫәпләй.

— Тәҡдимегеҙ дөрөҫ. Хакимәбеҙгә вице-канцлер ҙа шундайын кәңәш биргәйне, әммә Стефан хаҡында аныҡыраҡ мәғлүмәттәрҙе күберәк туплау мөһим. Тағы ҙур сер асам һеҙгә: Черногорияға кенәз Долгоруков етәкселегендә отряд ебәрәсәкбеҙ...

— Рәсәйҙең үҙендә лә ялған Петр Федоровичтар...

— Эйе-эйе, — тип бүлдерҙе хеҙмәткәр Елисейҙы, — тоторон тотоп бөттөк. Тағы берәй яңыһы баш ҡалҡытмаһын — һеҙгә ошо йәһәттән айырыуса сослоҡ күрһәтергә кәрәк. Аңлайһығыҙмы?

— Төшөндөм.

— Тейешле ҡағыҙҙар, аҡса менән тәьмин ителәһегеҙ. Етмәҫтәй тойолһа, Ырымбур губерна йәки Өфө провинция кәнсәләренә мөрәжәғәт итерһегеҙ — уларға йәшерен хат ебәрелде лә инде. Йөрөп ҡайтҡас, Черногорияға хөкүмәт иҫәбенә оҙатырбыҙ, пенсион тәғәйенләйәсәкбеҙ...

Шулай итеп, 1769 йылдың яҙ башында килеп төшкәйне ул Яйыҡҡа Һаҡмар йылғаһы ҡойған ерҙә урынлашҡан ҡалаға. Унан һуң Стәрлетамаҡ тоҙ пристаненә йүнәлде. Бына хәҙер, йәй башланып торғанда, Өфөгә лә килеп юлыҡты. Артабан сәфәрҙе кирегә дауам итәсәк. Байтаҡ мәғлүмәт йыйылды ла инде. Был тарафтарҙағы халыҡтың батшалыҡҡа ҡаршы асыуы ҡабара башлаған шул. Петр Өсөнсө тураһында ла хәбәрҙәр ҡуйыра... Эйе, кешеләрҙең хәтере батшаларға ҡарата оҙон була — оноталармы ни инде бигерәк тә тәхеттән көслөк менән ҡолатылғандарын, үлтерелгәндәрен! Ана, уны Өфөгә килтергән ылаусы урыҫ та юл буйына Петр Федоровичты маҡтап килде: йәнәһе, крәҫтиәндәрҙе азат итергә уйлаған, хатта шундай указ да әҙерләгән булған, ти; дворяндар менән помещиктарҙың хоҡуҡтарын сикләгән, халыҡҡа тағы әллә ниндәй еңеллектәр бирергә ниәтләгән. Шуға ла, йәнәһе, уны үлтерергә маташҡандар, ә ул бер ябай һалдат ярҙамы менән ҡасып ҡотолған, имеш. Хәҙер уңайлы мәл көтә, ти...

Өфө сиркәүе ҡунаҡханаһында йоҡлай алмай борһаланғанда Елисей, үҙенең юлдағы бер хатаһын иҫенә төшөрөп, йәнә уңайһыҙлыҡ кисереп алды, маңлайына тир бәреп сыҡты хатта...

— Бына һин, Алла бәндәһе, Петербурҙанһың, — тигәйне ылаусы. — Әйт әле һин: Петр Федоровичтың табутта ятҡанын үҙ күҙҙәрең менән күрҙеңме?

— Юҡ, ул саҡта Балҡан тауы тарафтарында инем.

— Унда ни ҡалған?

— Бына ошолай мосафир сифатында Аллаһҡа хеҙмәттә йөрөнөм, әҙәм балаларына иман нуры таратмаҡтан...

— Ху-уш. Һинең кеүек сиркәү мосафирҙары күп йөрөй шул хәҙер... Хуш, үҙең күрмәгәнһең батшаның табутта ятҡанын, ә күргәндәр ни һөйләне һуң? — Монахҡа һынсыл ҡарап, ныҡышты был.

— Батшаға оҡшамаған әллә ниндәй ят әҙәм ята табутта, йөҙө ҡапҡара... Ошондайыраҡ хәбәрҙәр күп йөрөнө ҡалала... — Елисей, һаҡһыҙыраҡ ебәргәнен аңлап, хәбәр

теҙгенен башҡа яҡҡа тарта һалды:
— Мәрхүмде батшаның тап үҙе тип раҫлаусылар ҙа бихисап булды, ҡайһыһына ышанаһың...

— Үәт-үәт, табутта ысын амператор ятмаған! Ысынын амператорҙарса ерләрҙәр ине, амператорҙар ятҡан урынға!

«Ил ауыҙына иләк ҡаплап булмай шул... Бынауы ябай мужикка ла ошондай нәмәләр билдәле икән — хәтәр!..» — тип уй йөрөттө Елисей. Ылаусыһынан һорай ҡуйҙы:

— Был тиклемен ҡайҙан ишеттең?

— Уложенная Комиссия* эшләгән замандарҙа күп һөйләнеләр был турала. Ишетмәгәйнеңме?

— Ишеткәйнем, әлбиттә...

— Бәс, нимә кәрәк һиңә йәнә? Ҡотолған ул, знамо!

— Ҡотолһа, ҡайҙа икән?

— Ил гиҙә, халыҡ тормошо менән таныша. Хәбәрҙәр йөрөй ҙаһә: йә бер ерҙә, йә икенсеһендә килеп сыға... Әле алтмыш өсөнсө йылда уҡ Яйыҡ казактары араһында йөрөгән тигәйнеләр.

— Һуңғы ваҡыттарҙа ишетелмәй бит хәбәре. Тотолғандыр.

— Батшаны тотоуы анһаттыр! Ҡасҡан, знамо!

— Ҡайҙа ҡасҡан?

— Сит илдәргә! — Ылаусы быны тәрән ышаныс менән әйтте — үҙе ҡасырған, гүйә. Елисейҙың тәне сымбырлап китте хатта. — Сит тарафтарҙа йөрөгәнгә лә ишетелмәй бит хәбәре әлегә. — Фекерен шулай нығытып ҡуйҙы Елисейҙың юлдашы.

— Ҡайһы илгә ҡасҡан?

— Туретчинаға түгелдер, берәй славян иленә йә германдарғалыр. Әсәһе немецка тормошҡа сыҡҡан булған бит...

— Балҡанға микән әллә? — Абайламайыраҡ ысҡындырҙы Елисей, телен тешләгәндәй, «Ым!» тип ҡуйҙы.

— Питербурх кешеһе, ысынын һин беләһеңдер, ась? — Ылаусы монахҡа һынамсыл ҡараны. — Балҡан, тиһең, ә?

— Юҡ, улай тимәнем дәһә! — Елисей тулҡынланды.

— Бәй, Балҡанды мин сығарманым...

Үлгән батша тураһындағы әңгәмәне көскә осланылар. Барыбер ҙә ылаусы аҙаҡҡы һүҙҙе үҙендә ҡалдырҙы:

— Балҡандың бер өлөшө Туретчина, икенсеһе австрияктар ҡулы аҫтында, эйеме?! Австрияктар төрөктәрҙе Рәсәйгә һөскөртә тинең бая. Тимәк, әле төрөк менән беҙҙең арала ҡупҡан һуғышта сит илдәрҙә йөрөгән Петр Федоровичтың да шойҡаны юҡ түгелме икән, ә?

Өфө сиркәүе ҡуналҡаһында борһаланып ятҡан Елисей ҡалын кәүҙәле буйсан ылаусы тураһында тағы бер ҡат һоҡланып уйланы: «Фекерле! Уй йөрөтә белә. Хәйер, яҙыу таныған кеше бит әле ул. Мужик түгел, казак...»

Таң беленгәндә генә серемгә китте монах.

## 12

Ҡаңғаҡ көн әкренләп киске эңергә ялғанды. Арып ҡайтҡастын, Салауат иртәрәк инеп ятты тирмәһенә. Ҡәйнәмдәр саҡырта тип киткәйне Әминә, һаман юҡ: эш тапҡандарҙыр инде киленгә. Ярай, тиҙҙән ике килен йомшарҙар. Күҙгә Гөлбәзирен генә алып ҡайтһын әле...

Салауат Гөлбәзирҙе уйланы, ләкин күҙ алдына Ҡобауҙа күргән теге ҡыҙыҡай килде лә баҫты. Ҡайҙан, кем ҡыҙы икәнлеген белмәй китте. Хатта исемен дә һорашмағансы Әбдрәшиттән — быны һантый! Тура килмәһә килмәй ҙә ҡуя шул.

Атаһы ҡапылғара ҡайтырға ниәтләгән дә ҡуҙғалырға йәһәтләгән икән. Шөкөр, табында ла, мәжлес аҙағы әңгәмәлә лә әр-талашлы хәбәр сығармағандар. Бары тик Юлай көмөш һумлыҡ ҡаплар ерҙе лә артабан һатмаҫҡа өндәп нотоҡ уҡыған.

---

* Уложенная Комиссия Рәсәйҙә закондарҙы яйға һалырға тейешле орган рәүешендә Мәскәүҙә һәм Петербургта 1767-1768 йылдарҙа эшләй, ләкин һөҙөмтәгә өлгәшелмәй.

Унының дәлилдәре менән килешкәндәр. Шулай уҡ ҡобауҙар үҙҙәре ерҙе ҡортомға биреү ихтималлығы хаҡында һүҙ күтәргән. Әлеге лә баяғы Яхъя инде, аҙаплы. Старшина тәүҙә ыҡҡа килмәйерәк ултырған, тора-бара күнгәндәй иткән, ләкин губерна кәнсәләренән килгән ҡағыҙға һылтанып, ҡортом килешеүенә старшина мисәте һуғылырға тейешлеген киҫәткән. Баҡтиһәң, егерме-утыҙ йылға йәшәргә индереп тороғоҙ тип, ниндәйҙер сыуаштар йөрөгән, имеш, яҙға һалым. Юлай әлегә тыйылырға ҡушҡан, Твердышев менән Мясниковҡа әле генә һимеҙ ҡалъя һоғондорҙоғоҙ тип, миңә һис тә кәңәш-төңәш итмәнегеҙ ҙәһә тип, үсегеп маташҡан маташыуын... Быларҙы Юлай юлда һөйләп килде улына.

— Ҡобау улысы айырым старшиналы булырға күптән ҡырсына ти торғайның, әле һиңә лә ҡаҙылыҡ ҡаптыра-ҡаптыра, шуны соҡоп этләшмәнеләрме?

Салауатына ялландыра ҡарап алһа ла ярһыманы атаһы, тыныс ҡына яуапланы:



— Юҡ, шипкертмәнеләр. Мине сығырымдан сығарырға тартынғандарҙыр... — Үҙе лә улына мәғәнәле ҡараш ташлап ҡуйҙы. — Йорт иҫәбе етмәгәнен дә беләләр.

Оялыбыраҡ китте Салауат. Ысынлап та, атаһының ихатаһына таш ырғытмаҡтан шаяра түгелме?

— Мынау заводсыларҙан ҡобауҙар ерен кире ҡайтарттырырға тип, әүәлге шикелде губернаторға йөрөп ҡарарғамы? Батшабикәгә үк барып етергәме?.. — Ғәйебен юйырға самалағандай, кәңәш көткәндәй, Салауат, йөҙөнә уйсанлыҡ билдәләре сығарып, эйәрендә тотош кәүҙәһе менән борола бирерәк ҡараны атаһына. — Яңы губернатор, бәлки...

— Гөбөрнатыр кем? Батшаның тоғро ҡоло ғына! Күп күрелде гөбөрнатырҙарын. — Юлай ҡамсылы ҡулын йәшәнлек тарафына тоҫҡаны ла арттараҡ килгән Айытбайға ҡысҡырҙы: — Шунда туҡтайыҡ серемгә-ялға: эңер төштө ләһә... — Салауатына ҡарап, һүҙен дауам итте: — Уылҡыф тигәне — мине ыстаршина иткәне — өс йылдан ашыу торҙо. Башҡорттарҙы тотош керәҫтиәндеккә көстәне. Аштыҡ үҫтереп кенә йәшәһен, йәнәһе. Урыҫтарҙы беҙҙең ерҙәргә күберәк күсереүҙе хәстәрҙәне. Шуларҙан өлгө аласаҡбыҙ, имеш... Нуғай даруғаһы ыстаршиналары менән сутниктарын йыйған был бер мәл. Аштыҡ сәсергә ҡыҫтаған. Бөрйән, Тамьян, Үҫәргән, Бошман менән Һыуын ҡыпсаҡтары улыстары баштыҡтары кәңәшкән дә яҙыу биргән: сәсәбеҙ, әммә тимерлек асырға, хеҙмәтселәр тоторға рөхсәт шарты менән... Андайыңмы? Хеҙмәтсе итеп беҙ ана шул урыҫ йә сыуаш керәҫтиәндәрен тотор инек бит.

— Аҡылды уйҙаған старшиналар! — тип хупланы улы. — Ысындап та, үҙ ерҙәребеҙгә үҙебеҙ тулы хужа булып алһаҡ, күскенселәр ағымы ла шыпа кәмер ине...

Һаҡал-мыйығы тирәһендә уранғылаған себен-маҙарҙы ҡыуҙымы Юлай, әллә һүҙен бүлдермәҫкә ишараланымы, шулай уҡ улын үҙе лә йөпләп ҡуйҙы:

— Аҡылды булмайса! Аштыҡ иккәс, тимер-томор йүндәмәй нисек көн күрмәк!

— Волков һуң?

— Гөбөрнатыр Сенатҡа еткергән тәҡдимде. Башҡорттарҙан шундайын яҙыу алғанын хатта-хатта ғәйептәп, шыйырғандар!

— Путятинсы? — Салауат әңгәмәне яңы губернаторға борҙо.

— Мына мыныһы беҙҙең игенселек менән шөғөлдәнеүгә ҡаршы торҙо ғәмәлдә. Битырбур әмерен үтәп, аштыҡ сәсергә ҡушҡан була, тимерлек астырмай. Урыҫтыҡына йөрөгөҙ йә һатып алығыҙ уларҙан, йәнәһе. Шунан урыҫ керәҫтиәндәрен күптәп күсерттерә баштаны Башҡортостанға, ә сыуаш-татарҙы-башҡаны килтертеүгә теше-тырнағы менән ҡаршы. Мыныһы һәйвәт тә…

Йәшәнлеккә килеп туҡтағайнылар инде. Аттар тышалды. Күгүләнгә шундуҡ йомолдо малҡайҙар. Селтерселтер матур көй сығарып аҡкан шишмәлә бит-һәт йыуғанда Юлай хәбәренең аҙағына барып етте:

— Шу Пүтәтин, башҡорт ерҙәренең хужаһы юҡ, ер биләү хоҡуғын раҫлаған грамыттары ла юҡ тип, башты аҙ ҡаңғыртманы. Буғандарының да Өфөлә илле туғыҙынсы йылдағы янғында көлө күккә осҡан тип тәҡрарланы.

— Эттең аламаһынан ней көтәһең…

— Эйе, эттек кенә инде. Яңы Мәскәү юлын беләң бит, улым. Шуның тирә-яғын, Башҡортостан көнбайышының хәтһеҙ ерҙәрен, беҙҙән бөтөнләй тартып алырға хаслашты, мәлғүн. Ҡаршы дәррәү сыҡмаһаҡ, ҡолаҡ ҡаға инек. Яу менән ҡурҡыттыҡ.

— Шәп иткәнегеҙ, атай!

— Ул һаман эттәште: Битырбурға тәҡдим биргән — һәр башҡортҡа ерҙе иректе һатыу хоҡуғы менән тәғәйен өлөштәп бүлергә! Үәт мәкерлек! Һис тә урыҫ ерҙәрен урыҫ крәҫтиәненә өлөштәп биргеһе килмәй, ә башҡорттоҡона ҡаныға…

…Юлдағы әңгәмәне ҡабаттан иҫенә төшөрөп, күңеле аша үткәреп, Әминәһен көтөп ятҡанда Салауат төрлө юҫыҡта уйланды: ҡайһылай ҙа ғәләмәт килеп сыға икән был донъя тигәндәре, нилектән икән, нисек уны яҡшыртырға, ни ҡылырға?

Һис ниндәй аныҡ фекергә килә алманы. Ана, Әминәһе лә мыштым ғына инеп эргәһенә ятты. Бик йылышманы иренә, уның ҡарауы Салауат һыға ҡосаҡлап алды бисәһен. Уныһы — ни ғилләлер — наҙлауға баштараҡ битарафлыҡ күрһәтте, шунан әкренләп күнә барҙы, ахырҙа ниндәйҙер ҡомарлы ялҡынға сорналды.

Тынлыҡ. Һыу яғында сутылдашҡан һандуғастар һиләүән тынлыҡты тәрәнәйткәндәй генә.

— Салауат, һиңә бер нәмәкәй әйтәм, — тип шыбырланы Әминә, яланғас тәнен ҡапламаҡҡа йоҡа юрғанды тартынҡырағас.

— Әйтеп ҡал, йоҡтап барам да… — Салауат ризаһыҙланғандай итте, шулай ҙа башын күперек мендәрҙән ҡалҡытынҡыраны.

— Баҙарғол түрә мында атайымды көтөп ятты. Әле ҡайным менән икәүҙән-икәү бышылдашалар. Мин оло ҡәйнәмә булышып усаҡ тирәһендә ҡайнаным да ҡайнаным…

— Әйҙә һөйҙәшһендәр — ҡарттарға нимә? Иртәгә күререм үҙен… Шулмы инде хәбәрең? — Салауат оҙон итеп иҫнәне лә әйләнеп ятмаҡ хәрәкәтләнде.

— Юҡ-юҡ! — Әминә ҡабаланып әйтә һалды: — Мин зауыттан ҡасҡан ике әҙәмгә юлыҡтым…

— Тотоп ашаманылармы?

— Мин уларҙы йәшерҙем…

— Үҙең ашарға булдыңмы?

— Туҡта! Тыңда! — Әминәнең дә ризаһыҙлығы өҫкә ҡалҡты. «Әй-й, үҙе малай атаһы — үҙе һаман малайлыҡтан сыға алмай шул, — тип эстән генә көйҙө ҡатын. — Үҙе икенсе бисә килтермәксе йортона…» — Улар икеһе лә тимерсе, үәт!

Ырғып ҡалҡынды Салауат, ышанмай һораны:

— Тимерселәр? Ҡайҙа, нисек, шунан?

— Ултырған да шыуған!

— Ай Әминәм минең! Бирәм тигән ҡолона… Аҫыл бисә һин!

— Әйтәйемме йәнә, Салауат?
— Әйт-әйт! Һөйҙә-һөйҙә, һандуғасым!
— Бир әле ҡулыңды… — Түштәренә килеп ятҡан ҡулды аҫҡараҡ шыуҙырҙы Әминә. — Ҡуй ошонда, һиҙәһеңме?
Бисәһенең ҡарынында әлдән-әле бала ҡыбырлағанынан кинәнес табып һүҙһеҙ ятты ир. Тәү ҡат Рамаҙанын да ошолай усы менән тыңлағанын хәтерләп, ҡыуана-ҡыуана һөйләнде:
— Тибешә, тибешә, шайтан малай!
— Ништәп малай ти?
— Кем һуң? — Ирекһеҙҙән ғәжәпләнде Салауат.
— Шайтан-күҙәйҙәрҙән шайтансыҡ ҡыҙ ҙа тыуа тей…
Әминәнең көлгәненә ҡушылып, шым ғына һамаҡланы ир:
— Типкес ҡоштар һис ҡасан
Себен ҡыумаҫ, ҡаҙ ҡыуар.
Күҙәйҙәрҙән бөркөт малай,
Ҡарсығалай ҡыҙ тыуар!
Тойғо-кисерештәренә иркәләнеп, тынлыҡҡа хозурланып, һандуғас моңдарына күмелеп, өнһөҙ яттылар. Аҫыл бисә талды рәхәт йоҡоға. Салауаттыҡы ҡасты ла ҡуйҙы инде бына. Һандуғастары ла шашынды ла киттесе… Ул ҡошҡайҙар нимә тип һайрай икән? Көндөмө, төндөмө данлайҙар? Әллә тирмә төнлөгөндә мелтелдәгән анауы бишалты бөртөк йондоҙҙо маҡтайҙар?
Күңелендә шиғыр яралғанын тойҙо Салауат. Күҙҙәрен йомоп, ишетелер-ишетелмәҫ мөңгөрләне:
«Төнгө тындыҡ. Әрәмәлә —
Һандуғас моңо.
Нимә тип һайрайҙар икән —
Белмәйем аны…»
Әһә! Килеп сыҡты бит әле! Йәле, йә!
Төнө буйы тыңданым мин
Һандуғас моңон…
Күҙемде йомоп…
Туҡта! Нимәһелер оҡшамайсы…
Туйырҙыҡмы тыңдағанда
Һандуғас йырын?!
Моңдарына һеңдергән ул
Ай-ҡояш нурын!
Үәт-үәт, килешә ләһә! Килеште! Хәҙер Әминәгә һөйҙәр… Уянмаһа, шиғырын Гөлбәзиргә апарып һөйләр ҙә ҡуйыр… Ҡуй, алайтмаҫ Салауат. Берәүһенә берҙе һөйҙәгәс, икенсеһенә лә шул уҡты ҡабатламаҫ инде… Ҡайҙарҙа ниҙәр эштәп йөрөнө икән Гөлбәзире?..
Серем-йоҡо аралаш ята Салауат. Әминәһе, аҫыл бисәһе, эргәһендә ята. Гөлбәзире иһә уға яғымлы йылмайып ҡул болғай. Юҡ, ҡул болғамай — оса ҡанаттарын елпей-елпей. Елпеүҙән рәхәт, һалҡынса… Бәй, был ҡошҡай теге ҡыҙыҡай ҙаһа — Ҡобауҙағы… Ҡараштары ниндәй иркә, серле… Ә-ә-ә, был ят ҡыҙыҡай һаҡаллы ике тимерсене бығаулап алған да уға табан өҫтөрәкләй бит. Ҡуй, улайтма! Мына бит улар миңә ниндәйен дә булат ҡылыс ҡойоп биргән — хәҙер мин ул бығауҙарҙы сабып өҙәм. Бығауҙарҙы өҙәм — тыймағыҙ!
— Тк-тк-тк! Тк-тк-тк!
— Тик-тик түгел, тыймағыҙ!
— Тк-тк-тк!
Таң турғайы сейәбей уянды. Тағы текелдәп алды ла, ян-яғында хәүеф-хәтәр юҡлығына ҡыуанғандай, тауышын алмаштырып, яңғырауыҡлы сутылдарға кереште. Уға һыҙғырып яуаплағаны килейек ине. Ҡарабаш турғай иһә үҙенең дә барлығын «тин-тин-тиррзз!» тип белдерә һалды. Ана, ер өҫтөнән нимәләр тәгәрлеп-тәгәрләп килә — йүрелек тигән ҡошҡай шулай өҙөк-өҙөк тауыш бирә ләһә: «тир-рит, тиррит!» Әрәмәлектә ҡыҫҡа ғына йоҡонһонан һандуғастар ҙа уянды — теш ҡайрап-ҡайрап алдылар ҙа кемуҙарҙан сутылдаша башланы…
Аллы-артлы уянышып, йәнә әллә нисәмә ҡош үҙҙәренсә сәләмләшәхәбәрләшә, тыуып килгән көндө именгә юрай. Аһәңле моң баҫты үҙән-туғайлыҡтарҙы, йылға-шишмәләр буйҙарын, урмандарҙы — донъяны солғап алды. Аҡ яурын сал бөркөткә лә — ҡоштар батшаһына — үҙ биләмәләрен байҡаштырып килергә ваҡыт еткәйне. Сағыу саңҡыуы тауҙарҙан-тауҙарға, ҡаяларҙан-ҡаяларға ҡаҡлыҡты:
— Ҡйыңҡ-ҡйыңҡ-ҡйыңҡ!
Яҡтырғайны шөйлә. Ҡояш та тиҙҙән моронлар.

## 13

Апаруҡ яҡтыра башлағанда Ҡобауҙағы Әбдрәшит иркен ихатаһында ҡамыт йүнәтеп ултыра, ерҙәге-һауалағы ҡош-ҡорт тауыштары уға һис ишетелмәй, уйҙары менән берсә бынан бик-бик алыҫтағы Ирәндек буйҙарында көн иткән шәриктәше, берсә бынан бик яҡында ғүмер һөргән икенсе һабаҡташы янына барып ҡайта...

«Һай-һай, Салауат! Яҡшы егетһең, аҡыллыһың, әҙәм балалары менән еңел аралашаң, ныҡлы-тоғро һүҙлеһең — үҙ-үҙеңә артыҡ ышаныуҙандыр инде мыныһы; үҙ баһаңды ла бик-бик беләң, артыҡ буйһоноусан түгелһең, үҙ баһаңдан сығып та шул кеше фекеренә үтә лә һирәк, — үтә лә һирәк! — ҡолаҡ һалаң да үҙ ҡарарҙарыңдан сығып эш итәң! Нисә йыл бергә уҡыныҡ — беләм дәһә һине! Минән ун йәшкә кесе икәнлегеңде лә иҫәпкә алмай китәң... Күңел асырға, күмәк халыҡтың иғтибар үҙәгендә торорға яратаң... Яратаң... Ҡатын-ҡыҙҙы айырыуса инде. Ана лаһа, бисәң бар көйөнә, йәрәшелгән ҡыҙың бар көйгә мындағы бер һылыуға күҙ төшөрөп тә тораң...»

Әбдрәшит, ниһайәт, ҡамытты йүнәтеп бөттө. Эше тамамланғанғамы, уйҙарының ҡыҙыҡ юҫыҡта барғанынамы бер килке аптыраныып ултырҙы, шикелле: күрмәнеаңғарманы солан ишегендә бисәһе шәйләнгәнен, иренә нимәлер тип өндәшергә уҡталып-уҡталып ҡуйғанын. Уйҙары тағы ла Салауат тирәһендә урағыланырға итте, әммә Әбдрәшит ҡапыл бүрәнә өҫтөнән ырғып торҙо ла ҡамытты һарай тышындағы ағас сөйгә алып барып элде, итәген ҡағыштырҙы. Башын күтәргәс кенә бисәһенә иғтибар итте.

— Нимә тиң, ә?

— Ин әйҙә, тим. Тамаҡ ялғап алайыҡ.

— Ә-ә, әйҙә һуң...

Сәй эскәндә лә ебәрмәй ине, буғай, Әбдрәшитте уйҙары. Ахырҙа ҡатын кешенең сабырлығы юйылды:

— Ней уйға баттың ул ҡара таңдан? Болдорға икенсе сыҡҡанда ла саҡ күрҙең?.. Ней хәсрәт баҫты тағы?

«Бисә-сәсәләр ҡыҫылмаһа ла ярар!» — тип өрҙәймәксе ине лә ир тыйылды шулай ҙа. Күндәм тыңлаусы ултыра ла алдында!

— Әй бисәкәй! Салауат менән анауы үткәнге әңгәмә иҫкә төштө лә ҡуйҙысы әллә нимәһенә... Мына ҡарале: беҙ ҙә бит шайтан-күҙәйҙәр янында төшөп ҡалған башҡорттарҙан түгелсе. Баҫҡынсыларға ҡаршы алама һуғышмаған ата-бабаларыбыҙ. Мин тыуған йылдағы күтәрелештә ҡайһыңдай ҙа батырлыҡ күрһәткәндәр әле! Ҡараһаҡал яуында һуң! Салауат беҙҙе битәрләгәнсә, ер һатабыҙ икән — белеп һатабыҙ. Биләгән ерҙәребеҙ ҡандайын! Шайтан-күҙәйҙәрҙеке ише генә тормай... Йәнә лә көтөүлек-сабынлыҡтарыбыҙҙы тарайтабыҙ икән — унең байы ашлыҡ ерҙәребеҙгә тейҙермәйбеҙ. Беҙ — ултыраҡ тиерлек халыҡ хәҙер. Ул игене, ул йәшелсәһе менән һатыу итәбеҙ. Урыҫтарҙың үҙҙәре шикелле, Европа халыҡтары һымаҡ... Ана, яҡыраҡ беҙҙә булып киткән Паллас та маҡтаны...

Ошо урында ирҙе әҙерәк бүлдереүҙе кәрәк тапты ҡатын:

— Олатайым әйтмешләй, ул ниместәрҙән көт изгелек...

— Аныһы шулай... Иллә был немец ғалим бит әле...

Ошо урында әңгәмәне тыштан һөрәнләү бүлде:

— Ә-әү, хужалар өйҙәмеү-ү? Сыҡ әле, Әбдрәш!

Ҡәҙерғол улы Яхыя ҡамытҡа баҙарлашырға килгән икән. Үткәнендә бер һумға килешә биребераҡ ҡуйғайнылар, әле төшөрә:

— Әйҙә илле тингә ҡул һуғайыҡ, — ти.

— Бәй-бәй, бер тәңкәгә килештек тәһә!

— Үәгәҙә биреүен бирешмәнек, уйлашырбыҙ тинек.

— Юҡ, Яхыя. Ҡамыт ашарға һорамай: урыҫтарға, ана, күберәккә лә еффәреп була.

— Еффәр, әләйгәс. Мин ней... үҙебеҙҙең башҡорт тип кенә инде... Әҙерәк кәметмәҫһеңме тип кенә инде... — Яхыя шулай һөйләнә-һөйләнә тартылды урам ҡапҡа тарафына.

— Туҡтале, өҙә һуҡма! — Әбдрәшиттең ҡамытты бик һатҡыһы килә, шуға ла Яхыя алдына таяҡ ташлап ҡарарға ниәтләп һораны: — Әйҙә, күреп кит, исмаһам; әҙерәк кәметһәң, тиһеңме?

Ҡамытты Яхыя ентекләп тикшерҙе. Һүҙһеҙ мыш-мыш килде, шунан ҡәтғи ҡарарға килде:

— Йә, етмеш тиндән!

Оҙаҡ һатыулашырға-тартҡылашырға Әбдрәшиттең дә самаһы һис юҡ — күндә. Быныһы бит әле иҫкенән яңыртылған...

Икеһе лә, ҡәнәғәт йылмайышып, яңы сабылған бүрәнә өҫтөнә ултырып, талғын әңгәмә ҡороп ебәрҙе.

— Хаҡтар ул, ней, үҙгәреп тора шул... — Яхыя матур һаҡалын һыйпаштырҙы. — Ҡамыттың, йәғни ҙә мәҫәлән, йәмғеһе ике һумдан үткән ере бар. Бәғзе урындарҙа ҡамыт менән сана ҡуша аты бергә ете һум ун тингә киткәнен һин дә, мин дә беләбеҙ ҙаһә...

— Шулай-шулай! — Әбдрәшит һүҙҙе атҡа күсерҙе: — Ана, Көңгөр тарафтарында бер ат ун биш һумдан үтә. Теге мин әйткән шәриктәшем Ҡузыбай йәшәгән яҡтарҙа... эйе-эйе, Ирәндек үә Һаҡмар яҡтарында, йылҡы малының бер ҙә бәйәһе юҡ икән — өс атҡа йәмғеһе егермене бирәләр.

— Башҡорттоң әйбере осһоҙ инде ул, Әбдрәшит туған... Етмәһә, тегене-быны һата тип, ҡаҙнаға һалым да һалдырталар бит әле...

— Әлдә лә генә иҫкә төшөрҙөң, Яхыя: был ҡамытты һин һатып алманың минән, йәме?!

— Ярар, үә ләкин алдан уйлашып ҡуйыйыҡ — мин аҡса түләнем, һин аҡса алманың, ә мынауы бүрәнәләреңде әпкилештем, шуға күрә һин рәхмәт йөҙөнән миңә...

— Эйе-эйе, Яхыя! — Әбдрәшит ҡыуанып бүлдерҙе әңгәмәләшен. — Ил араһында һирәк тешләләр ҙә, юҡҡа-барға ҡолағын ҡарпайтырға әҙер торғандар ҙа юҡ түгел. Үҙең беләң... — Аласыҡҡа саҡырған бисәһенә боролоп өндәште: — Әпкил мында ғына! Мынауындай ҙа хозур көндә тар донъяла ултырып ней... — Ошо ерҙә Әбдрәшит хәбәр теҙгенен бүтән тарафҡа борорға ниәтләне — бөрйән ырыуынан шәриктәше тураһындағы һүҙен яңыртты: — Теге Ҡузыбайҙы әйтәм әле йәнә: үҙҙәренең яҡтарында, хатта Ырымбур тарафтарында йылҡы малы осһоҙ үткәнлектән, былтыр көҙгә һалымыраҡ Өфөгә ҡыуҙы аттарын...

— Йә-йә? Күпме килтерҙе икән?

— Күп түгел — егермегә лә етмәй ине. Алдан һөйләшкәнсә, мин дә барырға тейеш инем шу уаҡытҡа — килеп сыҡманы. Аҙаҡ мәҙрәсәлә осрашҡанда һөйләне: ул да килеп етә алмаған икән провинция үҙегенә...

— Ней буған — ат ҡараҡтарына юлыҡҡан әллә?

— Өҫтөнә баҫтың! Эстәрлетамаҡ пристане тирәһендә булған хәл. Төндә. Былар өсәү, тегеләр алты-ете, ти! Өйөр айғыры менән сығырға башы еткән бит шәриктәштең! Хайуанҡай шул тиклем дә ҡурсалай, ти! Яҡын да юлатмай, ти. Ҡузыбай ҙа юлдаштары менән өйөр түңәрәкләп саба-саба икән, ҡараҡтарға йә сыбыртҡы, йә һуйыл менән эләктерәбәрә икән! Йоғондормағандар юлбаҫарҙарҙы!..

— Үәт шәп икән дә шәриктәшең! Шунан-шунан?

— Ҡыҫҡаһы, өйөрҙө айғыры менән бергә эләңгә пристань тирәһендә арзан ғына хаҡҡа бер башҡорт ағайына һатҡан да ҡуйғандар... Әлеге лә баяғы шул үҙебеҙҙең йыныс тип инде.

Әңгәмәнең ҡайһылай ҙа ҡыҙыҡ килеп осланыуына Яхыя көлөп ебәрҙе хатта. Бер аҙҙан ҡайтырға ҡуҙғала-ҡуҙғала әйтте:

— Хәйләкәр зат һин, Әбдрәш! Ай, хәйләкәр...

## 14

Ҡасҡындарҙан елдәр иҫкәйне. Зымзыя гәйептәрсе ваҡытлы төйәктәренән. Яҙғы ынйыҡ көндәрҙән

һуң дәррәү күҙ асҡан, сылт аҡ көнгә салт көлөшөп ултырған төрлө-төрлө сәскәләрҙән-үләндәрҙән һорарғамы? Һөйләп бирә алмаҫтар шул… Хәйер, нишләп өндәшмәһендәр — ана ла тош-тош изыратылғандары иламһырап ултыра, төҫтәре юлыған*, бәғзеләре тамам иҙелеп һүнгән… Әлеге урындарҙан байтаҡ ситтә кәкәндәгән эҙҙәр һуҙыла — арба туғыныныҡы… Күрәһең, таңға ҡарай килеп ҡаптырғандарҙыр ул ҡаҫҡындарҙы… Шулайҙыр. Шулайҙыр, сөнки бына был ерҙә бер нисә шыйыҡбикә ағас алтәкмәк төкөүҙән арба аҫтында ҡалған, һыҙырылған урындары бар, йәш япраҡтар өҙгөләнгән. Ай, харап иткәндәр ул ҡаҫҡындарҙы! Тимерселәрҙе! Шайтанкүҙәйҙәргә хатта ла хатта кәрәк әҙәмдәрҙе!

Иренең аптырағанына-көйәләнгәненә ни әйтергә лә белмәй ыуаланып-ыуаланған Әминә ахырҙа йөрьәт итте:

— Салауат, мында Һөйәрембәт ҡулын күрәм…

— Кем? Кемде? — Салауаттың һорауы мәғәнәһеҙерәк сыҡты.

— Һуң, бер Һөйәрембәт инде…

— Уның мында ней ҡатнашы?

Иренең күҙҙәрендә зәһәр балҡышып ҡуйған һаҙағайҙар ҡурҡытманы ҡатынды, тәүәккәллегәйне ул. Үҙе лә ҡарашына ҡатылыҡ, ныҡлыҡ билдәләре яҡты.

— Аптыраҡовтар аптыратыр инде һине! Шуларҙың бер һәүереге үҙенә өйөр тупламаҡтан беҙҙең тирәгә килеп сыҡҡан, шул бит инде ботон һындырып ҡазаланды… Ҡаҫҡындарҙы күрҙе ул, Һөйәрембәт, атын эҙләгәндә…

Барсаһын да түкмәй-сәсмәй һөйләп бирергә тура килде Әминәгә. Их, теге төндә үк тураһын бәрмәгән… Тор инде бына хәҙер ни ҡурҡырға, ни оялырға белмәй. Гүйә, үҙе ысындан да гәйепле… Атаҡ-атаҡ, Салауат нишләптер тынысланғандан-тыныслана барасы. Ярһығандан-ярһыр урынға. Хатта йөҙөнә йылмайыу ғәләмәттәре лә сыға һымаҡ. Юҡ-юҡ, ҡапылда ҡыҙып китер, һис нәмә менән иҫәпләшмәйенсә үҙенекен генә ҡылыр Салауат түгел был. Эйе, иренә ниндәйҙер яңы бер сифат инде, шикелле, бөгөн. Ана лаһа — киң йылмайып ебәрҙе, ҡараштары иһә үткерләнеп киткән йәнә лә; һикереп тигәндәй — йәтсәме ни! — килеп ҡатынын ҡосаҡлап алды; етди ҙә, шул уҡ ваҡытта яғымлы ла ҡарап, бышырт ҡына (бер япраҡ, бер ҡыяҡ ишетмәҫлек итеп) әйтте, һандалға һуҡҡан сүкештәй ауыр төштө йомшаҡ тойолған һәр һүҙе:

— Мин… яратам… һине, Әминә! Ҡурҡма, ҡошсоғом! Бисәкәйем минең, борсолма!

Үҙе һөйләй, ә ҡулдары — Әминәгә иң яҡын, иң ҡәҙерле, иң наҙлы ҡулдар — сәсенән, битенән иркәләй. Бына ҡулдар ҡапыл ҡатҡан ағастай тойолдо, Салауат дауам итте:

— Аптыраҡ ағайға үсем тамсы юҡ, ә суҡынмышын… суҡындырасаҡмын! Билләһи!

Ҡото осто Әминәнең ошондайын да һәлмәк үсле һүҙҙәрҙән, ләкин ҡараштары, килбәте менән белгертмәне иренә. Ысынлап та йәшәтмәҫ ул Һөйәрембәтте ерҙә! Йәшәтмәҫ! Ай, аллаҡайым! Һаман үсләшеп, ул сибәр егеттең йәнен ҡыйып йә имгәтеп, үҙенең дә башын бастырыуҡта серетер инде был Салауат!

Ай, Салауатым! «Мин һине яратам!» тигәнендә хәҙер килеп нисек кенә аңларға һуң? Нисек итеп? Киреһенсәме әллә? Гөлбәзирҙе икенсе бисәлеккә алыуыңды ауыр кисермәһен типме? Йомағайланыуыңмы шулай? Улайҙан китһә, Салауат тағы ҡурҡынысыраҡ таһа! Ай, алла! Ташламаҫ уны ире — айырып ебәреү гәҙәте һирәк беҙҙең халыҡта, иллә мәгәр ҡуйыны әүәлгеләй йылы, татлы булмаҫ иренең… Ысынлап гонаһ шомлоғо был Һөйәрембәт. Исемен дә ҡушҡандар бит әле…

— Шунан? Ништәйбеҙ, Салауат?

Әминәнең үҙ-үҙен тотошо ла, тауышы ла тыныс. Ирендәре лә дерелдәмәне, ҡашы ла һелкенмәне. Әлеге һорауҙары ирҙе ир, ғаилә баш-

*Юлыу —уңыу; төҫ ташлау.

лығы күреп, хатта тауышына бойороулыраҡ өндәр индереп бирҙе. Был — Әминәнең дә холоҡ-фәғеленә өрйәңы сифаттарҙың инеүе. Унауға өйләнмәгәйе Салауат, әллә нисәмә Гөлбәзирҙәрҙе алһын кәләшлеккә — ул бит баш бисә булып ҡала! Баш бисә! Дәрәжәһе юғары ҡала! Үҙ урынын да, үҙ хоҡуҡтарын да белер, Салауатының дәрәжәһен дә юғары тотор! Уның Баш бисәлегенә ымланы лаһа Салауаты...

— Алағайымға, тим, Әминә, хәҙер үк тоҡойоп сығып китһәк, эш ҡыра алмаҫбыҙҙыр. Бәләкәс кәңәш-төңәш тотайыҡ.



Аяҡ бөкләп ултырҙылар. Теҙген остары эйәр ҡашағаларына бәйләп ҡуйылған аттар, баштар эйеп, утлай тыныс ҡына — бар тип тә белмәй хужаларының ғәмдәрен, кисерештәрен. Тирә-яҡ гөр килә меңмең тауыштарҙан. Һәр кемдең үҙ көйө, үҙ ғәме.

— Һиңә хаслыҡ ҡылмаҡҡа йә Эҫем зауытына, йә яҡындағы берәй урыҫ түрәләре торлаған урынға алып киттеләр инде ул бахыр ҡасаҡтарҙы...

— Ништәп улай тиң? Һине шаһит итә алмайҙар ҙаһа! Күп булһа, мына иң яҡшы өйөр айғырыбыҙҙы һуйып ашағандар тип ялыу бирерҙәр, түләү һорарҙар. Уларға бит әле ҡасҡындарҙы тотоп килтергән өсөн дә бүләк тейеш...

— Мине шаһит итерҙәр, Салауат. Ҡасҡындарҙы язалап әйттерерҙәр. Етмәһә, уларға мин алып барып биргән беҙҙең монаяттар ҙа бар бит.

Ир менән ҡатын тәрән уйға сумып ултыра. Аттары хушһынып утлай, ҡойроҡтарын тәненә һуҡҡылай, ялдарын ялбыратып, баш сайҡай, ара-тирә хужаларына ҡараш ташлай: был иркенлек, был йәннәт күпмегә, йәнәһе... Аттар янына күҙ һирпеп алды Салауат. Бер-бер ҡарарға килде, ахырыһы.

— Уаҡиғала Һөйәрембәттең дә ҡатнашҡанын, ҡасҡындарҙан да туҡмалғанын иртәрәк белгән булһам, хәл икенсе төрҙө килеп сығыр ине, бәлкем... Хәҙер һуң. Уларҙы ысындап та, һин тоҫмалдағанса, тейеште урынға тапшырғандарҙыр инде бығаса. Бәс, беҙ бөгөн ышанысты егеттәребеҙҙе эшкә ҡушайыҡ: ҡайҙа, кем ҡулына тапшырғандарын шымсылаһындар. Үҙебеҙҙең яҡтан шулай итәйек: һин белмә лә күрмә — ул монаяттарға тамғабыҙ һалынмаған. Ҡасҡындарға килгәндәме? Тотолғанды язалап үлтереү йолаһы юҡ. Быны улар беләә. Әҙәм йәнен ҡыймағандар бит. Сыбыртҡының елдеһенән егерме бишәрҙе төшөрөрҙәр ҙә, бығауҙап, йә үҙ хужаларына, йә бүтән берәй заводҡа оҙатырҙар...

Оҙонға китте Салауаттың һүҙе, ләкин Әминә иренең хаҡлығын аңлай, шуға ла ләм-мим өндәшмәне, тәрән көрһөнөп алды ла иркәгенә итеп әйтте:

— Ҡайтайыҡсы, Салауат. Ҡарарың дөрөҫ, тим. Яҙмышҡа ни яҙған, шуны күрербеҙ.

Урындарынан бер юлы ҡалҡҡан хужаларының ниәтен менгеләре шундуҡ төшөндө: яндарына һалмаҡ юртып килделәр.

Андрей менән Леонтий тураһында ниҙер белешмәгә күпме маташ-

маһындар — асыҡланманы. Аптыраҡовтың улдары ла бер ни ҙә белгертмәне. Салауат менән һәүетемсә иҫәнләшеп йөрөнөләр... Көҙгә һалым ғына сала-сарпа ишетелеп ҡалды: имештер ҙә ҡасҡындар ҡасҡан... Бынағайыш! Әкәмәт шул донъя тигәндәре; хәтәр әкәмәт!

## 15

Мәкәтиндәр старшинаһын, Айытбайҙың йырҙарына әүрәтеп, тағы бер көн тотто Юлай, шунан махсус яғылған мунсаға алып китте. Миндектең йомшағы, үләндәр ҡушылып бәйләнгәне. Эсемлектең аҫауы — ҡайнап-күпереп торғаны. «Ах-ух!» «Ых-ох!» сабынышып, йүкә йыуғыс менән арҡаларҙы ышҡышып, таҫтамалдарға уранышып, ике дуҫ, ике түрә, быйыл көҙ бер туған ҡоҙа булышасаҡ ир уртаһы ирҙәр, тирҙең һуңғы тамсыларын һыҡмаға ултырышты. Аҫтарында — яңы сабылған хуш еҫле бесән, алдарында — көрәгә. Баҙарғолдоң егеттәре менән Айытбай мунса эҫеһендә һөйәктәрен йомшартырға инеп, сайылдашырға, хахылдашырға, ыһылдашырға-ухылдашырға керешкәндә, быларҙың әңгәмәһе донъя рәхәтлектәрен маҡтауҙан донъя ғәмдәренә күскәйне.

Гәп Петербурҙа батшабикәнең, уның ярандарының, дворяндарҙың, бүтән бай ҡатлам кешеләренең ләззәт кисереп йәшәүе тураһында бара.

— Елизавета батшабикә түшәктә табандарын ҡытыҡлатырға ятҡан, — тип көлдө Баҙарғол. — Күрәһең, берәй рәхәтлек тапҡандыр инде.

— Лизавет хаҡында быны ишеткән бар, уның ир-атты бик яратҡанын да беләбеҙ. Быныһы һуң? Катеринаны әйтәм.

— Был алман ҡыҙы ла йәшләй уйнаш итә башлаған, Петр Өсөнсөгә сыҡҡас та ныҡ шаярған. Үҙе батшабикә булып ултырғас, теге Георгий Орловына тоғро, имеш.

— Арлуф Кәткәгә өйләнергә лә маташҡан түгелме? — тип һораны Юлай, тәпәндәге ҡымыҙҙы ҡунаҡ хөрмәтенә сығарылған иң матур ижау менән һапыра-һапыра.

— Ундайын һүҙ йөрөнө, хатта ҡуйырып та киткәйне хәбәр. Беҙ Уложенный Комиссияла саҡта, Орлов үҙен ысынлап та төп хужа, Екатеринаның — батшабикәнең түгел — ире сифатында тойоп ҡылана торғайны, ә был ҡутлаға тегеңә бесәйҙәй һырпалана көллө ғаләм алдында — депутаттарҙың байтағына хатта оялырға тура килә ине бәҙзе саҡтарҙа. Ҙур дәрәжәләге ярандарын әйтеп тә тормайым, унан күпкә түбәнерәктәре лә шул бисәне үлтереп маҡтауҙа бер-береһе менән ярышты, шул килмешәк, гүйә, алланың үҙе инде. — Баҙарғол битен һөртөп алды, ике-өс уртлам ҡымыҙ йотҡандан һуң, туҫтағын уҙағына кире һондо. Быныһы һауытта ҡалғанды көрәгәгә ҡойҙо ла һапырғылап алды. — Иң ҙур министр, Павел Петровичтың төп тәрбиәсеһе Панин Никита шулай тип белдергән, имеш: «Императрица йәне теләгәнде ҡыла ала, ә Орлова ханым батшабикә була алмай!»

— Дөрөҫөн бәргән бит, малай! — Юлай ҡыуанып китте. Иң ҙур хакимдарға ла тураһын әйтергә кәрәк тигән фекер шулай шатландырҙы, шикелле, уны. Ҡымыҙын бик мул уртлап, мунсалағылар яғына ҡысҡырҙы: — Әй! Ней булды? Ниңә аҡырыша баштанығыҙ тоҡтомалдан? — Ишектән Айытбай башын тыҡты. «Бер ни ҙә юҡ, түрә. Эҫе һалғанда ҡунаҡтар саҡ бешмәне», — тине лә юғалды. — Ә-ә, — тигән булды ла һүҙен дауам итте: — Йәштәр алабарманыраҡ инде ул. Улар йәшендә, хәйер, беҙ ҙә шулай инек инде... Их, йәшлек! Нимә тигән әле Сыңғыҙ хан? «Муйынында ҡамыт йөрөтһәң дә, йәш булыу шәп», тигәнме?

— Һин нимә? Үҙеңде ҡарт тоя башланыңмы? Өс бисәң менән деүелдәтеп донъя көтөп ятаң бит әле. — Баҙарғол бармаҡ янаған булды ла көлөп өҫтәне: — Батша ярандарынан һис тә кәм йәшәмәйһең һымаҡ...

— Йәшәйһең буғымды! — Юлай ситкә бер төкөрөп ҡуйҙы. — Һөй-

ҙәнем дәһә Өфө кәнсәләрендә нимәләр кисергәнемде. Үҙ халҡың тормошон саҡ ҡына ла еңеләйтә алмағас, минең түрәлегемә ни һан да, башҡаларҙан хәллерәк йәшәүемә ней һан!

Баҙарғол һул терһәгенә таянып ятты, тағы тамаҡ ебетеп ҡуйҙы, шунан моңһоулана төшкән тауыш менән зарланды:

— Ҡуй инде! Баяғы комиссияла беҙ, башҡорт депутаттары, халҡыбыҙҙың яҡшы көн итмеше өсөн күпме көрәшеп хитланғанды һин беләһең. Урыҫтарынан, казактарынан, башҡаларынан һайланған бәғзе депутаттар ҙа халыҡтың көн күрмешен әҙерәккә генә лә һәйбәтерәк итмәгә нисәмә ҡат ауыҙ күтәреп ҡараны — фәтеүәһе ҡайҙа?! Екатерина — аҡыллы ла, хәйләкәр ҙә, мәкерле лә ҡатын, һүҙ хәүефле юлдан китә башлағас, эҙемтәһенең шәхси хакимлығына янағанын тойоп, төрөктәр менән һуғыш сығыуына һылтанды ла комиссияның эшен, йәнәһе, кисектереп торҙо; ғәмәлдә беҙҙе таратыу ине был.

— Һыныҡҡа һылтау табылған шул... — Юлай көрһөндө, шунан ниндәйҙер эске кинәйә менән һорай ҡалды үҙенән тәжрибәлерәк, дәрәжәлерәк, белемлерәк, аҡыллыраҡ һанаған уҙағынан: — Төрөктәр беҙҙең файҙаға һуғыш асты тип уйҙайыңмы?

Аҫтыртын, тәрән мәғәнәле ине һорау. Быны Баҙарғол һиҙмәҫ тегелэй. Юлайға тура, һынамсыл ҡараны.

— Һай-һай, буласаҡ ҡоҙам минең! Хәтәр кешеһең дә инде! — тине ул. — Нисәмә йыллыҡ тәжрибәбеҙ тураһында тылҡып тормайым — яҡшы беләһең үҙең дә. Алдарбай тархан Иҫәнгилдин теге замандарҙа уҡ әле юҡҡа ҡаршы һуғышмаған төрөктәргә... Уларҙан ярҙам һорағанда ярҙам итмәгәндәрен дә беләбеҙ. Бына әлеге уаҡытта Рәсәй батшалығына яу асыуы иһә — тап беҙҙең файҙаға! Аныһын үҙең дә һиҙеп ултыраң...

«Тәжрибә тураһында тылҡып тормайым» тиһә лә Баҙарғол, үҙе уға ишара яһамай ҡалманы шулай ҙа. Иллә мәгәр мәсьәләне лә елле ҡуйҙы. Тел төбөн төшөндө Юлай — асыҡтанасыҡ, тас маңлайға бәреп әйтте:

— Һинең аҡылды, хәйләкәр кәнтәйеңә ҡаршы комиссияларҙа хәбәр һөйҙәп түгел, ҡорал менән торор кәрәк. Уаҡыты етте!

— Һинеңсә көс-кеүәтебеҙ етерлекме? Дүрт даруға халайыҡтары ла дәррәү күтәрелерлекме?

Юлай ҡыҙғандай итте, ләкин эстән тыйылды.

— Һорауыңа яуапты үҙең биреп ултыраң баянан бирҙе. Башҡорт иле буйҙап миңә ҡарағанда һин күберәк йөрөйөң.

Баҙарғол хәйләкәр йылмайҙы:

— Уаҡыты етеңкерәмәгән шул. Көтәйек теге үлтерелгән батшаның табылғанын...

— Нисәмә тапҡыр табылып, нисәмә ҡат юғалды инде уныһы. Балаһы Павил да атаһының үлтерелгәненә аслан ышанмай тигәйнең. Битырбур ҙа, Мәскәү ҙә ышанмай тигәйнең. Мына хәҙер күреп торабыҙ: бөтөн Рәсәй ышанмай, — тине Юлай. Тауышын баҫыңҡырап дауам итте: — Мин һинән бая урыҫмурыҫтарһыҙ ғына баш ҡалҡыта алабыҙмы тип һораным?

Баҙарғол сабыр ғына яуап ҡайтарҙы:

— Юҡ, Юлай старшина! Ата-бабаларыбыҙ моң заман әүәле шул урыҫ менән бергә йәшәүҙе һайлаған икән, бөгөн уларһыҙ булмаҫ. Киләсәктә, бәлки... Көтәйек.

Мунсанан сыҡҡан егеттәр шымшырыҡ кейенеп бөттө. Старшиналар ҙа, урындарынан ауыр ҡуҙғалышып, ҡабаланмай кейенде. Киске һый-мәжлескә ваҡыт еткәйне. Юлайҙың кесе малайы бая уҡ атаһына ым биргәйне инде, ситтәрәк сабыр ғына көтөп торҙо. Айытбай менән ҡунаҡ егеттәр үҙҙәре менән эйәртте уны — алдан киттеләр. Юлай уң ҡулы менән Баҙарғолдоң һул терһәгенән һаҡ ҡына тотоп бара, өнһөҙ атлауҙы хуп һанамағандай, баяғы үҙ-ара әңгәмәгә йомғаҡ яһаны:

— Раҫ әйтәң, түрә: урыҫтан ҡалып та, ҡасып та булмаҫ! Әҙерәк көтәйек!